✓ **Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Мартта 2013 йылдың икенсе яртыһына тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән гәзитебеҙгә яҙылырға була. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йыллыҡҡа яҙылыу хаҡы - 360 һум 24 тин. Ошо айҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән тәүге 10 кеше беҙҙең бүләккә лайыҡ буласаҡ. Кем алыҡ? Шулай уҡ тәүге ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 мартҡа тиклем яҙылһа, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлау мөмкинлегенә эйә.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2 - 8 МАРТ (БУРАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№9 (531)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аҡ ҡайындан...**



ҡара күләгә төшә

3

**Хәрбилектән һуң килгән...**



әҙиплек һәм иман

8

**Ир баланың...**

әйткән һүҙе бер булһын!



9

**Һәр актер...**

үҙ геройының адвокаты



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тарих буйынса Рәсәй дәреслектәрендә Башҡортостан тарихы ҡасан үҙ урынын алыр икән?

***Азамат АҠЪЮЛОВ, БДУ-ның тарих факультеты доценты, тарих фәндәре кандидаты:*** Илебеҙ Президенты В.Путиндың, тарих дәреслектәре ниндәй булырға тейеш, тигән фекере йәмғәтселектә төрлө уйҙар тыуҙырҙы. Унда урта мәктәптәр өсөн берҙәм тарих дәреслектәре булдырыу тураһында һүҙ бара. Урта мәктәптең төрлө йәштәге уҡыусыларына тәғәйенләнгән дәреслектәр, Президенттың уйынса, берҙәм концепция нигеҙендә төҙөлөргә, Рәсәй тарихының бөтә осорҙарын да логик рәүештә үҙ эсенә алырға һәм үткәнебеҙҙең барлыҡ биттәренә лә хөрмәт менән һығарылырға тейеш. "Әлбиттә, был уҡыу әсбаптары асыҡ миҫалдар нигеҙендә "Рәсәй яҙмышының төрлө халыҡтар, йолалар һәм мәҙәниәттәрҙең берләшеүе һөҙөмтәһендә тыуғанлығын күрһәтергә тейеш", - тип тә билдәләне ил башлығы. Был дәреслектәрҙе төҙөүгә Рәсәй Фәндәр академияһын, шулай уҡ ике йәмәғәт берләшмәһен - тарихи һәм хәрби-тарихи ойошмаларҙы йәлеп итеү кәрәклеге хаҡында фекер яңғыраны. Президенттың был тәҡдимдәрендә илдең берҙәмлеген нығытыу, граждандарҙа илһөйәрлек тойғоларын уятыу теләген күрәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта илебеҙ иҡтисадындағы кире хәлдәр, йәмғиәтебеҙҙәге тиҫкәре күренештәр фонында бындай изге маҡсаттарға ирешеп булырмы икән, тигән шик тыуа. Донъя баҙарында конкурентлы була алырҙай тауарҙар етештермәйенсә, нефть һәм газ һатып ҡына йәшәүебеҙ, сәнәғәт өлкәһендә һөҙөмтәле модернизация үткәрелмәүе, юғары кимәлдәге эшһеҙлек, ауыл мәктәптәрен ябыу, эскелек һәм наркоманлыҡ ҡуйылған бурыстарға өлгәшергә мөмкинлек бирерме? Йәмғиәтебеҙҙә йәшәүе көндән-көн хәүефлерәк була бара. Закондар кемдер өсөн үтәлә, кемдер өсөн үтәлмәгән кеүек. Ҡайһы ваҡыт былар бөтәһе лә махсус рәүештә эшләнелгән һымаҡ та тойолоп китә. Ошондай шарттарҙағы көнитмешебеҙ юғары идеалдарҙың халыҡ аңына барып етеүенә мөмкинлек бирерме?

Икенсе һорау - яңы дәреслектәрҙә беҙҙең башҡорт һәм илебеҙҙең башҡа халыҡтарының тарихы сағылыш табырмы? Уларҙы яҙғанда ул милләттән сыҡҡан ғалимдар ҡатнашырмы? Ошондай һәм башҡа бик күп һорауҙар тыуа. Шулай уҡ ил башлығының "халыҡтарҙың, йолаларҙың һәм мәҙәниәттәрҙең берләшеүе ..." хаҡында фекере бик үк аңлашылып етмәй. Бында берҙәм Рәсәй милләтен (этносын) барлыҡҡа килтереү тураһында һүҙ барамы, әллә илебеҙ халыҡтарының берҙәмлеген көсәйтеү идеяһы ятамы? Минең уйымса, әгәр "халыҡтарҙы, йолаларҙы һәм мәҙәниәттәрҙе берләштереү" халыҡтарҙы бөтөрөү йүнәлешен алһа, ул яҡшыға килтермәйәсәк. Әлеге ауыр заманда (сөнки беҙ ҙур үҙгәрештәр ваҡытында йәшәйбеҙ) күптәребеҙ йән тыныслығын тик үҙ рухи донъяһында - телендә, моңонда, тарихында, динендә һәм милли берҙәмлегендә генә таба. Әгәр уларға ниндәйҙер зыян килһә, был халыҡ юҡҡа сығасаҡ. Шул уҡ ваҡытта ул тулы кимәлдә башҡа халыҡ булып та китә алмаясаҡ, кешелек сифаттарын юғалтып, деградацияға дусар буласаҡ.

Күренеүенсә, Рәсәй халҡында илһөйәрлек тәрбиәләү, берҙәмлекте нығытыу идеялары ил алдында торған башҡа мөһим мәсьәләләр менән ифрат тығыҙ бәйләнештә. Уларҙы комплекслы рәүештә хәл итмәй тороп, айырым берәйһенә генә баҫым яһау һөҙөмтәһеҙ. Шулай уҡ әйтеп үтелгән йүнәлештәге эш илебеҙҙең барса халыҡтарының да рухи ҡиммәттәренә таянып үткәрелергә, улар араһында яҡшы мөғәмәлә (толерантлыҡ) тәрбиәләү аша алып барылырға тейешлелер, тигән фекерҙәмен.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ЕҢЕҮСЕ БУЛЫП ЙӘШӘ!

## Был Уйындар ҙа шуға өндәй

**Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә барған VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарында 20 илдең 60 ҡалаһынан спортсылар йыйылды. Бынан алда үткәрелгән Ҡышҡы уйындар менән сағыштырғанда быйыл ярыштарҙа ҡатнашыусылар һаны ике тапҡырға күберәк. Байрамдың абруйлы ҡунаҡтары араһында Халыҡ-ара балалар уйындары комитеты президенты Торстен Раш, Халыҡ-ара балалар уйындары комитетының генераль секретары Ричард Смит, РФ Дәүләт Думаһының Физик культура, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе Игорь Ананских һәм башҡалар бар.**

**(Дауамы 4-се биттә).**

UFA 2013 INTERNATIONAL CHILDREN'S WINTER GAMES



Йәш юлаевсылар - еңеүселәр.

✓ Улар өҙөлгән быуындар сылбырын ялғарға маташа. Араларында әпкәләйҙәр ҙә булыр, әлбиттә, әммә әҙерәк булыр һымаҡ. Көслөләр янында әпкәләйҙәр үрсемәй, улар көсһөҙҙәр янында барлыҡҡа килә.



ЯҠШЫ ХӘБӘР

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ...

## электрон хат



**Кесә телефоны, планшет, ноутбук, компьютерҙар - быларҙың барыһы ла тормошобоҙға ныҡлы үтеп ингән әйберҙәр. Улар беҙгә бәйләнеш булдырыусы ғына түгел, бар донъяны иңләр мөмкинлек биреүе, алыҫ араларҙы яҡынайтыуы менән әһәмиәтле. Тәү ҡарашҡа, был өлкәлә бер ниндәй ҙә яңылыҡ индереү мөмкин түгел кеүек, ләкин юғары технологияла иркен "йөҙгән" йомро баштар ҡулланыусыларға тағы ла ҙурыраҡ мөмкинлектәр биреүсе төрлө программалар уйлап табыуын дауам итә. Оҡшондай егеттәрҙең береһе - планшет һәм Android операцион системалы смартфондарҙа башҡорт телендә яҙыу мөмкинлеге биргән клавиатура уйлап табыусы Илдар КИНЙӘБУЛАТОВ. Һүҙҙе уның үҙенә бирәйек.**

- Һәр көн смартфон һәм планшеттар ярҙамында ебәрелгән смс-хәбәрҙәр һәм электрон хаттарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Ләкин быға тиклем уларҙа башҡорт телендә яҙышыу мөмкинлеге булмау сәбәпле, күптәр үҙенең туған телен боҙоп, урыҫ хәрефтәрен ҡулланып, хәбәрләшә ине. Ә уйлап ҡараһаң, Android операцион системалы ҡоролмалар күптән ҡулланыла һәм беҙҙең республикала ла улар бихисап. Шуға күрә, махсус рәүештә ошо системалы ҡоролмалар өсөн башҡорт телендә яҙыу мөмкинлеге биргән клавиатура уйлап табыу мәсьәләһен хәл итергә ҡарар иттем.

Тәүҙән үк иң тиҙ юлды һайланым, йәғни бөгөнгө көндә киң ҡулланылған платформаға (уның авторы - Юрий Бакунин) башҡорт телендә клавиатура һәм һүҙлек индерҙем. Шуға күрә, барлыҡ эш процесы ни бары өс аҙна ваҡытты алды. Ә барыһын да яңынан уйлап сығарған осраҡта ярты йыл тирәһе ваҡыт кәрәк булыр ине. Клавиатураның иң мөһим ҡаҙанышы - ул 200 мең тирәһе һүҙ тәшкил иткән башҡорт телендәге һүҙлектең булыуы, йәғни ниндәйҙер һүҙҙе яҙа башлағас уҡ, программа ул һүҙҙең бернисә вариантын тәҡдим итә. Был, беренсенән, хәрефләп һүҙ яҙып ултырыуҙан күпкә аҙыраҡ ваҡытты ала, ә, икенсенән, һүҙҙен дөрөҫ яҙылышын белмәгән осраҡта хатаһыҙ итеп яҙыу мөмкинлеге бирә. Башҡорт дәүләт университетының Компьютер филологияһы лабораторияһы хеҙмәткәрҙәре тарафынан төҙөлгән һүҙлектә бөгөнгө көндә киң ҡулланылған һүҙҙәргә өҫтөнлөк бирелгән. Һүҙлекте төҙөү иң күп ваҡытты алды, ләкин һөҙөмтә үҙен аҡлар, тип ышанам.

Башҡорт телендә аралашырға теләүселәргә *Google Play* магазинына инеп, *Jbak keyboard* ҡушымтаһын ҡуйырға һәм башҡорт клавиатураһын йөкләргә генә кәрәк. Шулай уҡ ҡушымтаны ***ildar.me/ba*** таһламаһына инеп тә күсереп алырға мөмкин. Ҡушымтаны ҡуйыу һәм ҡулланыу буйлай. Артабан шулай уҡ башҡа операцион системалы ҡоролмаларҙа ла башҡортса яҙыу мөмкинлеге биргән клавиатура уйлап табыу ниәте бар, сөнки һәр кем әңгәмәсеһенә бай һәм матур башҡорт телендә смс-хәбәр йәки электрон хат ебәреү мөмкинлеге алырға тейеш.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Тарих буйынса Рәсәй дәреслектәрендә Башҡортостан тарихы ҡасан үҙ урынын алыр икән?

**(Башы 1-се биттә).**

***Наил ӘМИНЕВ, Ф.Мостафина исемендәге 20-се Өфө башҡорт гимназияһының тарих уҡытыусыһы:*** Мәсьәлә бик урынлы ҡуҙғатыла, сөнки ил Президенты Владимир Путин әйтмешләй, Рәсәй яҙмышы, уның тарихы ошо илдә йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да берлегенән, уларҙың традициялары һәм мәҙәниәттәренән хасил булған. Тимәк, яҙмышы быуаттар буйына Рәсәйҙеке менән айырылғыһыҙ булып үрелгән Башҡортостаныбыҙ тарихы ла Рәсәй тарихы дәреслектәрендә төп урындарҙың береһен биләргә тейеш, тип уйлайым. Сөнки төрлө милләт халыҡтары бер-береһе тураһында яҡшы мәғлүмәтле булғанда ғына уларҙа милләт-ара мөнәсәбәттәр мәҙәнилеге тәрбиәләнә, халыҡтар дуҫлығы нығына ала. Рәсәй ниҙәр күрһә, Башҡортостан да шуны кисергән: оло илгә ниндәй генә яу ябырылһа ла, башҡорттар рус халҡы менән иңгә-иң тереп, уртаҡ илебеҙҙе яҡлаған, һаҡлаған һәм дошманды бергә ҡыйратҡан. Мәҫәлән, 1812 йылғы Ватан һуғышын ғына алып ҡарағанда ла был бик асыҡ күренә: башҡорттарҙың 28 атлылар полкы Наполеон ғәскәрҙәренә ҡаршы иҫ киткес ҡыйыу алышып, Парижғаса барып еткән. Ә Рәсәй тарихы дәреслегендә был хаҡта бер ниндәй мәғлүмәт юҡ, тип әйтерлек. Иманым камил: Рәсәй мәктәптәре уҡыусылары, Рәсәйҙә федерализм идеологияһына нигеҙ һалыусы Әхмәтзәки Вәлидиҙең кем икәнлеген дә белмәй, моғайын, сөнки ил тарихы дәреслектәрендә был хаҡта ла - ләм-мим. Ә башҡорт халҡының данлы улдары - милли геройҙарыбыҙ Салауат Юлаев, Миңлеғәле Шайморатов, Шакирйән Мөхәмәтйәнов һәм башҡалар? Үкенескә ҡаршы, Салауат Юлаев Рәсәй халҡына ни бары хоккей командаһының исеме булараҡ ҡына билдәлелер, сөнки Емельян Пугачев ихтилалы тураһында яҙған дәреслек авторҙары Кинйә Арыҫлановтың да, Салауат Юлаевтың да кем икәнлеген хатта үҙҙәре лә белмәйҙәр кеүек тойолоп китә. Ә 80-гә яҡын Советтар Союзы Геройы биргән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының тиңһеҙ батырлығы хаҡында нинә өндәшмәй Рәсәйҙең тарих дәреслектәре? Әйткәндәй, яҡын киләсәктә беҙҙең Башҡортостан уҡыусылары ла был йәһәттән тома наҙан, маңҡорт булып ҡалмағайы, сөнки республика мәктәптәрендә Башҡортостан тарихы аҙнаһына ни бары 1 сәғәткә ҡалдырылды, ләкин йәйләп ҡына уныһы ла юҡҡа сығарыласаҡ, әлбиттә, эш шуға бара. Гәрсә бында РФ Президенты В.Путиндың, тарих дәреслектәрен "үткәнебеҙҙең һәр битенә ихтирам менән" ҡарап, яңынан яҙырға, тигән күрһәтмәһе генә хәлде ҡотҡармаһа...

***Салауат КӘРИМОВ, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире, Рәсәйҙең почетлы мәғариф хеҙмәткәре:*** РФ Президенты В.Путиндың мәктәптәрҙә өйрәнелгән "Ватан тарихы"н һәм тарих буйынса башҡа әсбаптарҙы яңынан ҡарап сығырға һәм урта мәктәптәр өсөн берҙәм дәреслектәр төҙөргә, тигән тәҡдиме бик урынлы булмаҡсы, әгәр ул ысынлап та объектив күҙлектән ҡаралып, илдәге бөтә халыҡтарҙың да мәнфәғәтен күҙәтһә. Хәтерләһәгеҙ, ил башлығы посына тәүләп һайланған ваҡытта уҡ әле В.Путин ошо мәсьәләгә иғтибарын йүнәлткәйне. Ул саҡта бер дәреслек мотлаҡ өйрәнелә торған әсбаптар исемлегенән алып та ташланғайны хатта, сөнки тарихсылар унда яҙылған хәл-ваҡиғаларҙың боҙоп күрһәтелеүен иҫбатлағайны. Был ваҡиғаға бәйле шул иҫкә килеп төштө: мин БР Мәғариф министрлығында эшләгән саҡта "Ватан тарихынан хикәйәләр" тигән дәреслек йөкмәткеһенә иғтибар иттек. Унда Рәсәйҙәге халыҡтар тураһында һәр төрлө мәғлүмәттәр, хатта улар тормошонан фоторәсемдәр бирелгәйне, ә бына башҡорттар хаҡында ни бары 1-2 һөйләм менән генә сикләнгәйнеләр. Беҙ, министрлыҡ хеҙмәткәрҙәре, тотто та Мәскәүгә, әлеге хрестоматияны төҙөүсе яуаплы авторға хат яҙҙыҡ һәм Башҡортостан, башҡорттар тураһында бик күп материалдар һалып ебәрҙек. Һөҙөмтәлә ошо материалдарҙы хрестоматияның яңыртылған баҫмаһына индереп ебәреүгә өлгәштек. Быныһ менән ни әйтергә теләйем? Дәреслек яҙыу, уны төҙөү һәм нәшер итеү ифрат яуаплы эш. Унда сикләнгән, тар ҡарашлы кешеләр эшләргә тейеш түгел. Төҙөүсе авторҙар тәжрибәле уҡытыусыларҙың, уҡытыусы-методистарҙың, ғалимдарҙың, хатта киң йәмәғәтселек фекерен иҫәпкә алып, бөтөн Рәсәй халыҡтары мәнфәғәтенән сығып эш итергә тейеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

### ӘПКӘЛӘЙҺЕҘ БЫУЫН БУЛЫРМЫ?

Быуаттарҙан-быуаттарға баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр олатайҙар, уларҙан беҙгә башҡортлоҡ, Уралыбыҙ - изге төйәк, ҡурай, йырҙар, данлы тарих ҡалған. Башлыса батыр фиғелле булған олатайҙар араһында бер-ике әпкәләй ҙә йәшәгән...

Егермénсе быуатта йәшәгән атайҙар ҙа олатайҙар ҡаҙанғанды һаҡларға маташып кен иткән: көрәшкән, үҙен фиҙа иткән, төҙөгән, әммә күп нәмәләрҙе юғалтҡан. Батырҙар араһында бахырҙар күбәйгән, әпкәләйҙәр бермә-бер артҡан. Бына шулай йәшәне ике-өс быуын атайҙар. Юғарылағылар ни әйтә - ҡуш ҡуллап хупланы, бер-береһен һатты, ашаны, батырҙы. Ҡотҡарырға ташланғандар ситкә тибелде йә аҫылды, атылды...

Тукһаныңсы йылдарҙа барлыҡҡа килгән милли хәрәкәт һәм уның ағзалары атай-олатайҙар данын, башҡорт данын ҡайтарыу буйынса ниҙер эшләне. Һәр хәлдә, башҡорт бар, башҡорт йәшәй, тигәнде ярты тауышҡа булһа ла раҫлап ҡуйҙы. Шунан тағы тынысланылды.

Әле бына олатайҙар һымаҡ айыҡ аҡыллы, батыр быуын килә шикелле инде. Улар өҙөлгән быуындар сылбырын ялғарға маташа. Араларында әпкәләйҙәр ҙә булыр, әлбиттә, әммә әҙерәк булыр һымаҡ. Көслөләр янында әпкәләйҙәр үрсемәй, улар көсһөҙҙәр янында барлыҡҡа килә. Йәш быуын икенсерәк. Амин, шулай булһын!

* * *

### БӨЙӨК ШӘХЕСТЕҢ ЮҠҠА СЫҠҠАНЫ

Билдәле шәхестең юбилей кисәһе булды. Шәхестең талантынан күңел киҙәндә. Халыҡтың уның талантын таныуы, күтәреүе лә һоҡландырҙы. Әммә... Кисәнең иң аҙағында сәхнәгә сыҡҡан ғаиләһе бар кәйеф күтәренкелеген һыпырып алды ла ташланы. Ҡатыны икенсе милләт кешеһе, тимәк, балалары ла башҡортса һөйләшмәйәсәк, фиғеле лә башҡортлоҡо һымаҡ булмаясаҡ - был инде күптән раҫланған хәҡиҡәт. "Атай" тип әйтте шулай ҙа ҡыҙҙарының береһе, шунан башҡа башҡортса бер һүҙ ҙә сыҡманы ауыҙҙарынан. Етмәһә, ағайҙың бүләсәрҙәре, урыҫса шиғыр уҡығандан һуң, ярым яланғас кейем менән көнсығыш көйөнә бейей башланы. Ә арыу ғына "нуҡмыш" булған ҡатыны, әсәй, өләсәй кеше, ағайыбыҙҙың муйынына уралды ла, уны супылдатып үбә башланы...

Шәхес даны шул минутта саң-туҙанға әйләнде лә, юҡҡа сыҡты. Йәлләү тойғоһо ғына ҡалды...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Дәүләт Думаһының Физик культура, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе Игорь Ананских, Дәүләт Думаһы депутаттары Николай Валуев һәм Рима Баталова менән эш осрашыуы үткәрҙе. Осрашыуҙа балаларҙы үҫмерҙәр һәм профессиональ спортты, олимпия һәм паралимпия хәрәкәтен үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде.

✓ БР Президенты Рөстәм Хәмитов Бөтә донъя шашка федерацияһы башлығы Гарри Оттен менән осрашты. 2012 йылдың декабрендә Пекинда үткән Бөтә донъя интеллектуаль уйындарында (Интеллиадала) БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиевтың Халыҡ-ара интеллектуаль спорт ассоциацияһы етәкселеге менән осрашыуы ойошторолғайны. Унда Интеллиаданы 2014 йылда Өфөлә үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Гарри Оттен хәбәр итеүенсә, 2014 йылда Өфөлә үткәреләсәк Интеллиадала бер нисә тиҫтә илдән 300-гә яҡын шашкасы ҡатнашасаҡ.

✓ Йәштәр симфоник оркестры баш ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарын 7 мартта Өфө сәнғәт училищеһында үтәсәк тәүге концертына саҡыра. Өфө дәүләт сәнғәт академияһы нигеҙендә ойошторолған яңы коллектив составына академия һәм сәнғәт училищеһы музыканттары, шулай уҡ Урта махсус музыка колледжы студенттары инде. Коллектив етәксеһе итеп халыҡ-ара конкурстар лауреаты, БР Милли симфоник оркестрының художество етәксеһе һәм баш дирижеры Рөстәм Сөләймәнов тәғәйенләнде. Йәш музыканттарҙан торған бындай симфоник коллективтар булдырыу - бөтә донъя кимәлендә ҡулланылған тәжрибә. Бындай оркестрҙар Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең байтаҡ ҡалаларында бар.

✓ 5 мартта Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында "Наҙлы йөрәк серен асҡанда" тип аталған шиғыр һәм йыр байрамы ойоштороla. Унда танылған шағирәләр Тамара Искәндәриә (Юлдашева), Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Зөлфиә Ханнанова, Гөлназ Ҡотоева, Лариса Абдуллина ҡатнаша. Кисәнең сценарий авторы - Зөһрә Бураҡаева, режиссеры - Сулпан Асҡарова. Бөтөн ҡатнашыусылар ҙа - Ш. Бабич исемендәге премия лауреаттары.

✓ 11-12 мартта "Айыҡ Рәсәй" йәмәғәт хәрәкәте лидеры, собриолог-профессор Владимир Жданов тағы ла Башҡортостанға килә. Ул Өфө һәм Сибай ҡалаларында йәмәғәтселек менән осрашыуҙар үткәрәсәк.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# АҠ ҠАЙЫНДАН...

## ҡара күләгә төшә



**Гәзиттең 4-се һанындағы "Ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барма" тигән әйтем хаҡында уй йөрөткәндә, күләгә төшөнсәһенә бәйле тағы ла бер әйтемгә иғтибар иттем. Ул да булһа - "Аҡ ҡайындан ҡара күләгә төшә". Ҡапылғарай уйлағанда, был әйтемдең мәғәнәһе өҫтә генә ятҡан кеүек тойола, әйтәйек, "Ҡара эттең бәләһе - аҡ эткә" тигән әйтемдәге мәғәнәне аңлау рәүешендә генә...**

Әммә, уйлана төшһәң, әйтемдәрҙең икенсеһе тәүгеһенең ябайлаштырылған бер варианты рәүешендә генә ҡабул ителә башлай. Тәүгеһенә килгәндә инде, уныһы тәрәнерәк, киңерәк, масштаблыраҡ. Тағы ла шуныһы: ҡайһы бер мәҡәл-әйтемдәрҙе бар тулылығында аңлар өсөн тарих төпкөлөнә төшөргә, бәғзеләренең асылына етер өсөн үҙебеҙҙең әле йәшәгән ерлектән ситкәрәк сығырға ла тура килә. Был хәл ике төрлө һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Беренсенән, мәҡәлдәр, әйтемдәр халыҡтың, йәмғәттселектең быуаттар буйына йыйылған тәжрибәһенән яһалған һығымтаһы, йәғни уларға быуатлыҡ, меңйыллыҡ фекер һыя. Икенсенән, башҡорт милләтенең йәшәү мөхите бөгөн беҙ аңлағандан һәм шаһит булғандан күпкә киңерәк булған һәм донъяның геосәйәси картаһы үҙгәреүе, халыҡтарҙың, ҡәбиләләрҙең күсенеүе, Евразия ҡитғаһында дәүер һайын империялар барлыҡҡа килеүе һәм юҡҡа сығыуы, XX быуаттың коммунизм тип аталған атеистик золом машинаһы ҡыҫымында был мөхит ҡыҫылғандан-ҡыҫыла, тарайғандан-тарая барып, хәҙерге хәлендә тороп ҡалған. Шуға күрә мәҡәл-әйтемде аңларға теләп, ситкә сыҡҡан хәлдә лә, үҙебеҙҙең ул донъя менән ҡасандыр бер мөхиттә йәшәгәнебеҙҙе лә аңлайбыҙ.

Шул мөхиттең береһе һәм иң ҙуры - Шәреҡ донъяһы. Рәсәй менән бер дәүләттә йәшәй башлағандан алып беҙ ул донъяның ситендәрәк тороп ҡалғанбыҙ. Ярлы ғына ғәрәп ғаиләһендә тыуып үҫеүсе Рәбиғә әл-Әҙәбиәне (713 йәки 714-801 йылдарҙа йәшәгән) бала сағында ҡоллоҡҡа һатҡандар. Әммә Рәбиғәнең көнө-төнө намаҙлыҡтан тормай, Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыуын, рухы менән ҡоллоҡто тоймауын күргән ҡол биләүсе уға ғәмәлдәге азатлыҡ бүләк итә. Ҡол биләүсе бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлағандыр: Аллаға ҡол булыусыны башҡа төрлө ҡол итеү мөмкин түгел. Рәбиғә бер нисә йыл сүллектә кешеләр менән аралашмай аскет (дәрүиш) булып йөрөгәндән һуң, Басрала йәшәй.

Дин тарихына бәйле әҙәбиәттә Рәбиғә әл-Әҙәбиә хаҡында бик һоҡланғыс яҙмалар ҡалған. Ул үҙе лә заманының иң абруйлы диндар затынан һаналған. Бер саҡ Рәбиғәнән "Аллаһы Тәғәләне яратаһыңмы?" тип һорағандар. Ҡыҙ ыңғай яуап биргәс, "Ә шайтанға нәфрәтең ни хәҙәре?" тигән һорау биргәндәр. "Миндә шайтанға ҡарата нәфрәт тойғоһо юҡ, сөнки Аллаһы Тәғәләгә һөйөүем йөрәгемдә шайтанға нәфрәтләнерлек урын ҡалдырмай", тип яуап биргән Рәбиғә.

Әлбиттә, Рәбиғә әл-Әҙәбиә үҙенең ғүмерен, тәненең һәм йәненең һәр күҙәнәген Аллаһҡа хеҙмәт итеүгә, Унең хозурында булыуға бағышлаһа ла, кешеләр араһында йәшәгәс, улар менән төрлөсә мөнәсәбәткә инеү ихтималлығынан да азат булмаған. Был йәһәттән уның тормошона бәйле бер ваҡиға бик фәһемле. Бер мәл Рәбиғәгә ғашиҡ булған йәш ғалим уны кәләшлеккә һоратырға килгән дә, ҡыҙға үҙенең килеүенең маҡсатын әйтеп биргән.

- Һине бик ҙур ғилемгә эйә тип әйтәләр. Әгәр ҙә минең өс һорауыма яуап бирһәң, һиңә кейәүгә сығам, - тигән уға Рәбиғә.

- Бир һорауҙарыңды, - тигән үҙ-үҙенән үтә лә ҡәнәғәт ғалим, маһайыулы ҡиәфәттә.

- Әйт әле, егет, мин был донъянан тәҡүәле диндар булып китәсәкменме? - тип тәүге һорауын биргән ҡыҙ.

Бик оҙаҡҡа уйға ҡалған егет. Шулай ҙа:

- Был бик ауыр һорау. Уға Аллаһтан башҡа берәү ҙә яуап бирә алмай, - тип яуаплаған.

- Ҡәбергә барғас, мин Мөнкир менән Нәкиргә нимә тип әйтәсәкмен? - тип икенсе һорауын еткергән Рәбиғә.

- Быны ла белеү мөмкин түгел. Бик ауыр һорау, - тип яуап биргән йәш ғалим.

- Өсөнсө һорауыма яуап бир: ахырызаман килһә, мин нишләрмен икән? - тигән ҡыҙ.

- Быны ла белеү мөмкин түгел, - тип яуаплаған егет.

- Ғалим була тороп, минең һорауҙарыма яуап бирә алмағасың, ниңә мине әйттерергә килдең һин, егет? Мин иң беренсе нәүбәттә кейәүлеккә дәғүә итеүсенең түгел, ә ғалимдың һүҙен ишеткем килгәйне. Шулай ҙа һиңә һуңғы бер һорауым бар: ир-атта һәм ҡатын-ҡыҙҙа күпмерәк дәрт һәм ялҡынлы теләк була?

-Ҡатын-ҡыҙҙа дәрт һәм ялҡынлы теләк туғыҙ дәүмәл, ир-атта бер дәүмәлдә тәшкил итә, - тип яуаплаған йәш ғалим.

- Улайһа, ҡатын-ҡыҙҙа аҡыл күпмерәк тә, ир-атта күпме? - тип тағы бер һорау өҫтәгән Рәбиғә.

- Ир-атта аҡыл туғыҙ дәүмәлдә, ҡатын-ҡыҙҙа бер дәүмәлдә генә тәшкил итә, - тип яуап биргән егет.

- Эх, егет, әгәр ҙә туғыҙ дәүмәл дәртемде һәм ялҡынлы теләгемде баҫыр өсөн миңә бер дәүмәл генә аҡыл да етһә, һин нишләп туғыҙ дәүмәл аҡылың була тороп, бер генә дәүмәл дәртеңә һәм ялҡынлы теләгеңә хужа була алмайһың ул, - тип һүҙен ослаған Рәбиғә.

Аҡыллы ҡыҙҙың ошондай һүҙҙәренән һуң ни иларға, ни көлөргә белмәгән йәш ғалим уның янынан китеп барырға мәжбүр булған. Рәбиғә йәш ғалимға ни өсөн шулай яуап табыуы мөмкин булмаған һорауҙар биргән һуң? Егетте мыҫҡыл итер өсөнмө? Юҡтыр, тип уйланыла. Сөнки икенсе берәүҙе күрәләтә мыҫҡыл итеү мосолманлыҡҡа күпкә ситен гонаһ һанала. Аллаһ хозурында булған Рәбиғә өсөн был бигерәк тә... Улайһа, ни өсөн ҡыҙ уға кейәүгә сыға алмауы хаҡында туранан-тура әйтмәгән? Ғөмүмән, ҡыҙҙың егеткә фәҡәт Хаҡ Тәғәлә тарафынан ғына бирелерлек һорауҙарҙы төбәүенең сәбәбе нимәлә?

Был һорауҙар барыһы ла һауала аҫылынып ҡала. Уларға яуапты Рәбиғә әл-Әҙәбиәнең яҙмаларында таба алабыҙ. Уларҙа Рәбиғә үҙенең Хаҡ Тәғәләгә ҡарата мөнәсәбәтен түбәндәгесә аңлата:

"Һәр бер ғашиҡ үҙенең һөйгәне менән икәүҙән-икәү ҡалырға ынтыла. Бына мин Һинең менән. Эй, Аллам, әгәр ҙә мин Һиңә тамуҡтан ҡурҡыуым арҡаһында хеҙмәт итһәм, шул тамуҡ утында мине яндыр, әгәр ҙә мин ожмахҡа өмөт итеп һиңә хеҙмәт итһәм, мине ожмахтан ҡыуып сығар. Әгәр ҙә мин Һиңә бер нигә лә иҫәп тотмайынса, берҙән-бер Илаһ булғаның өсөн хеҙмәт итһәм, Үҙеңдән мәңгелек хозурыңдан мине айырма... Аллаһҡа һөйөүем мине шул тиклем ялмап алды, минең Унан башҡаны яратырлыҡ бер ихтыяжым да ҡалманы! Мин йәшәүемдән туҡтаным һәм үҙ-үҙемдән ситкә сыҡтым һәм ерҙә хатта күләгәм дә ҡалманы..."

Беҙ бында Рәбиғәнең ни өсөн әлеге егеткә кейәүгә сыға алмауының яуабын табабыҙ. Ошо урында "Аҡ ҡайындан ҡара күләгә төшә" әйтеменең асылына бер аҙ яҡынлашабыҙ һымаҡ. Хатта аҡ ҡайындың да күләгәһе ҡара була, фәҡәт ҡояшҡа йә Аллаһы Тәғәлә хозурына өлгәшә алғандарҙың ғына күләгәһе булмаймы, улай булғас? Ғөмүмән, күләгәнең ағы, ҡараһы буламы? "Күләгә" төшөнсәһе ике мәғәнәгә эйә: яҡтылыҡ фонында кешенең, предметтың ергә төшкән шәүләһе һәм сифаттың, ғәмәлдең, хәрәкәттең башҡалар тарафынан ҡабул ителеү рәүеше. Шул уҡ ваҡытта берәүҙең изге уй-ниәттәр менән башҡарылған ғәмәле лә башҡалар тарафынан "ҡара күләгә" итеп ҡабул ителеүе бар. Бер үк ваҡытта башҡалар тарафынан изгелек итеп ҡабул ителгән ғәмәл кемдер тарафынан иҫәпкә ҡоролоп башҡарылыуы ла бар. Тимәк, тормошта икенсе сифаттағы күләгәң ҡалмаһын өсөн фәҡәт изгелектәр ҡылып ҡына йәшәргә ҡала. Был аҡыллы һәм зиһенле итеп яратылған Әҙәм балаһы өсөн төп йәшәү маҡсаты, милли идея булырҙай һүҙҙәр. Киреһенсә булған осраҡта Ерҙә изгелек, яҡшылыҡ, миһырбанлыҡ төшөнсәләренә бөтөнләй урын ҡалмаҫ ине.

"Күләгә"гә бәйле мәҡәл-әйтемдәр хаҡында бер һүҙ башлағас, әйҙә, дауам итәйек. Алдағы һанда "Күләгәнән юҡ тауҙан биҙ" әйтеме хаҡында һүҙ алып барырбыҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Республика балалар клиник дауаханаһында урынлашҡан заманса диагностика үҙәге файҙаланыуға тапшырылды. Яңы бина 2011 йылдың октябрендә төҙөлә башлаған һәм бөгөн бәләкәй пациенттар бында тикшереү үтә. Ошо көндәрҙә яңы Үҙәкте Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡараны. Республика балалар клиник дауаханаһының баш табибы Рөстәм Әхмәтшин һүҙҙәренсә, әлеге үҙәктең өҫтөнлөгө шунда: барлыҡ хеҙмәттәр бер урында күрһәтеләсәк. Дауаханала йыл һайын Башҡортостандың төрлө ҡала һәм райондарынан 20 меңгә яҡын бала дауалана, алты мендән ашыу операция үткәрелә. Юғары технологиялы медицина ярҙамы - 1500-ҙән ашыу балаға, консультатив ярҙам 25 меңгә яҡын сабыйға күрһәтелә.

✓Ағымдағы йылдың июнь-июль айҙарында Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында балалар табыу йорто сафҡа индерелергә тейеш, ә сентябрь-октябрь айҙарында онкология диспансерында "Кибер-нож" системаһын һәм Эмиссион томография үҙәген асыу планлаштырыла. Бынан тыш, һаулыҡ һаҡлау объекттары бөтә республика буйлап төҙөләсәк.

✓Йәрмәкәй ауылында йылан ырыуы башҡорттары ҡоро үтте, унда ырыу советы һәм башлығы һайланды. Сарала ҡатнашыусылар ырыу башлығы итеп район хакимиәтенең мәғариф бүлеге начальнигы, район башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе Әбүзәр Мөхәмәтйәновты һайланы. Ҡорҙа йәмғеһе 200-гә яҡын делегат ҡатнашты. Шулай уҡ сарала Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, БР Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының этнология бүлеге мөдире Юлдаш Йосопов, Борай, Бишбүләк, Туймазы райондары вәкилдәре ҡатнашты

✓Республика Президенты Указы менән билдәле драматург, Рәсәйҙең әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә Дәүләт премияһы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты, БР атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Флорид Бүләковҡа "Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы" исеме бирелде.

**"Башинформ"дан.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# АЛАҺЫ ЛА, ҠОЛАҺЫ ЛА...

**Уҙған аҙнала ҡала округы Советы депутаттары сираттағы, әммә быйыл беренсе сессияһын уҙғарҙы. Былтыр ҡала парламенты эшмәкәрлеге менән даими таныштырып барғанлыҡтан, сараның төп мәлдәренә генә иғтибар йүнәлтеүҙе кәрәк тип таптыҡ.**

Ултырышта беренсе тапҡыр Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттарына Мөрәжәғәтнамәһенең төп положениеларын тормошҡа ашырыу буйынса саралар планы раҫланды. Сөнки был документ ҡала округы Советы депутаттары яғынан етди ҡануниәт ижад итеү эшмәкәрлеген талап итә. Спикер Евгений Семивеличенко был хаҡта үҙенең сығышында ентекләп туҡталды. "Беҙ Өфө ҡалаһы территорияһында граждандарҙың хоҡуҡи ижадсылыҡ (ҡанундар эшләгәндә үҙҙәренең тәҡдимдәрен индереү мөмкинлегенә тотҡарлыҡһыҙ эйә булыу) инициативаһын тормошҡа ашырыу тәртибе тураһындағы положениены әҙерләнек, - тине ул. - Бөгөнгө ултырышта ул ҡабул ителәсәк. Бынан тыш, Президент төбәктә торлаҡ проблемаһын хәл итеүҙе лә өҫтөнлөклө мәсьәләләр рәтенә ҡуйҙы. Бының өсөн ҡануниәтҡә үҙгәрештәр индереү талап ителә һәм шуға күрә ошо мәсьәләгә ҡағылышлы республика законы проектын әҙерләп, уны мартта Башҡортостан парламентына тәҡдим итәсәкбеҙ".

Шулай уҡ ултырышта 2013 йылға бурыстар ҙа билдәләнде. Унда төп урынды ғәмәлдәге ҡануниәт мониторингына айырыуса иғтибар биреп, муниципаль хоҡуҡи акттарҙы федераль һәм республика ҡануниәтендәге үҙгәрештәргә тап килтереү бурысы алып тора. Һәм, әлбиттә, һәр депутаттың үҙ округында һайлаусылар менән туранан-тура эшләүен, үҙ округында ниндәй хәл-торош булыуына иғтибар йүнәлтергә ҡушты ҡала округы Советы рәйесе. Юҡһа, депутаттар араһында матбуғат сараларында сығыш яһау мөмкинлегенән файҙаланмаусылар ҙа, сараларҙа ҡатнашмаусылар ҙа, ул ғына ла түгел, хатта төрлө ярты йыллыҡ эшмәкәрлеге хаҡында һаманғаса отчет бирмәүселәр ҙә бар икән. Был дәлил үҙе үк йөк аттары араһында алаһы ла, ҡолаһы ла булыуын раҫлай.

# УРАМДАРҘА - ЯҢЫ ТЕХНИКА

**Үткән аҙна һуңында ҡала райондарын төҙөкләндереү буйынса муниципаль учреждениеларға 12 FORWAY WS50 тейәгесе тапшырылды.**

Сарала ҡатнашҡан ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов билдәләүенсә, Өфө граждандарҙың уңайлы йәшәү шарттарын тәьмин итеүсе хеҙмәттәрҙе камиллаштырыу буйынса яҡшы темп алды.

- Беҙ торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә ҡаланы ҡарҙан таҙартыуҙың сифатын күтәрергә ярҙам итәсәк универсаль бәләкәй габаритлы техниканы беренсе тапҡыр ҙур партия менән алабыҙ. Был эштең башы ғына. Киләһе миҙгелгә махсус хеҙмәттәр һөҙөмтәле эшләһен өсөн ҡар таҙартыусы техника паркын сифатлы итеп яңыртырға планлаштырабыҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Ирек Ишмөхәмәт улы.

Ҡала хеҙмәттәренә асҡыстар һәм документтар тапшырғандан һуң тейәгестәр менән танышыу булды. Улар махсус аҫылмалы ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Был техника ҙур габаритлы техника үтеп инә алмаған территорияларҙы - тротуарҙарҙы һәм тар урамдарҙы таҙартыу өсөн тәғәйенләнә.

*АФАРИН!*

# ЕҢЕҮСЕ БУЛЫП ЙӘШӘ!

## Был Уйындар ҙа шуға өндәй

(Башы 1-се биттә).

● VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарын асыу тантанаһында мәртәбәле ҡунаҡтарҙан тыш, Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һәм Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты. Командалар парады үткәс, РФ Президенты Владимир Путиндың Уйындарҙа ҡатнашыусыларға хаты уҡып ишеттерелде. "Барлыҡ атлеттарға - уңыштар, ә тамашасыларға - онотолмаҫ тәҫораттар теләйем", - тигән юлдар ҙа бар унда.

Уйындарҙың флагы күтәрелгәндән һуң республика Президенты Рөстәм Хәмитов барлыҡ йыйылыусыларҙы Уйындар башланыу менән тәбрикләне, спортсыларға "яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү һәм гүзәл уйын" теләне. Артабан Халыҡ-ара балалар уйындары президенты Торстен Раш ярыштарҙы асыҡ тип иғлан итте. Артабан тамашасылар иғтибарына күҙ яуын алырҙай сағыу тамаша күрһәтелде. Йыр-моң, ҡатмарлы гимнастик хәрәкәттәр менән байытылған бейеүҙәр, республика тормошонан видео-яҙмалар - былар барыһы ла сит ил тамашаһына Башҡортостаныбыҙҙы, уның аҙмы-күпме рухын танытты.

● Уйындарға рәсми старт бирелер алдынан Өфө журналистары Торстен Раш, Көньяҡ Кореянан Дэгу ҡалаһынан килгән VIP-ҡунаҡ Шин Чоль Вон һәм Өфөләге VI Балалар уйындары дирекцияһы етәксеһе Сергей Степанов менән осрашҡайны. Корея вәкиле менән аралашҡан саҡта ул: "Башҡортостанға килеп, кешеләрҙең матурлығына һоҡланып йөрөйөм. Халҡығыҙ ихлас, кәләс икән", - тип йылмайҙы. Торстен Раш әфәнде иһә уларҙы беҙҙә йылы ҡаршы алыуҙары, байрамды матур итеп ойоштороуҙары өсөн ойоштороусыларға рәхмәтен еткерҙе һәм: "Ярыштарҙа ҡатнашҡан һәр команданың һис юғы берәр миҙал менән ҡайтыуын теләр инем", - тигәйне.

Сит илдәрҙән, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан килгән барлыҡ командаларҙы ла ҡалабыҙҙың йөҙөк ҡашы булырҙай урындарға - Салауат Юлаев һәйкәленә, Дуҫлыҡ монументы, Ләлә-Тюльпан мәсетенә, Башҡортостан Республикаһының Милли музейына һәм башҡа иҫтәлекле урындарға экскурсияға йөрөттөләр. Ҡайһы бер командалар Өфөнөң иң алдынғы белем биреү усаҡтары менән танышыуҙы кәрәк тип тапты. Мәҫәлән, Швейцарияның Лозанна ҡалаһынан килгән 13 тау саңғысыһы һәм сноуборд оҫтаһы баш ҡаланың М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусылары менән осрашты. Ҡунаҡтар иғтибарына башҡорт халҡы, уның арҙаҡлы улдары һәм ҡыҙҙары тураһында мәғлүмәт еткерелде. Уҡыусылар Хансура Дәүләтов (11 синыф) менән Гөлназ Мөхәмәҙиева (10 синыф) тәржемәсе-гид ролен үтәне. Улар инглиз телен "һыу һымаҡ эсеп", сит ил кешеләре алдында башҡорт йәштәренең, халҡыбыҙҙың абруйын арттырҙы, тиһәҡ тә хата булмаҫ. Башҡорт халҡының "Күмер йөҙөк" уйынын Швейцария командаһы ихлас ҡабул итте. 13 йәшлек Арно исемле үҫмер егет, уйын шарттары буйынса, уртаға сығып, бейергә лә өлгөрҙө. Беҙ Ляпольд исемле егет менән дә бер аҙ әңгәмәләшеп өлгөрҙөк: "Рәсәйҙә һыуыҡ, тигәстәр, багажымдың күп өлөшөн йылы кейем менән тултырғайным. Һеҙҙә ни, беҙҙәге һымаҡ уҡ йылы икән дә", - тип, башланы һүҙен Швейцария егете. "Башҡортостан тураһында бығаса ишеткәнең бар инеме?" тип һорауыма, егет "Юҡ, әммә "Салауат Юлаев" исемле хоккей командағыҙҙың беҙҙә уйнаған уйынын күргәйнем", - тип, шатланды. Әйткәндәй, ошондай уҡ һорауҙы төрлө командаларҙан тиҫтәләгән сит ил кешеһенә бирҙек, араларында АҠШ-тың Кливленд ҡалаһы вәкиле Томас Куук ҡына: "Башҡортостан тураһында ишетеп беләм", - тип яуапланы. Шулай ҙа беҙ был һүҙҙәргә лә ҡыуандыҡ.

● Уйындарҙы ҡабул итеүсе команда составында Башҡортостан Республикаһының алты ҡалаһы - Белорет, Күмертау, Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Учалы һәм Өфө вәкилдәре ҡатнаша. Рәсәй данын Өфө егеттәре - йәш юлаевсылар яҡлай. Улар Уйындар башланған көндә уҡ Канаданың Келоуна хоккей оҫталары менән осрашып, Төньяҡ Америка ҡитғаһы уйынсыларын 8:0 иҫәбенә тар-мар итте, ә Латвияның Даугавпилс ҡалаһы йәш хоккейсыларын 19:0 иҫәбе менән ҡыйратты. Әйткәндәй, йәш юлаевсылар төркөмөндә Байрас Абдуллин исемле башҡорт егете лә бар. Парадҡа сығыр алдынан Олимпия резервы әҙерләүсе балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбенең "Салауат Юлаев" хоккей клубы тренеры Вадим Шәрифйәнов: "Халыҡ-ара ярыштың тап Өфөлә ойошторолоуы ҡыуандырмай ҡалмай, әлбиттә. Егеттәр ҙә "өйҙә" уйнауҙары өсөн шат. Уйындарҙа уңышлы сығыш яһарбыҙ, тигән ышаныс та ҡанатландыра беҙҙе", - тип, тәрбиәләнеүселәренә ҙур өмөттәр бағлауын йәшермәне. Уларҙы фотоға төшөрөргә теләүгебеҙҙе белгәс, егеттәрҙе: "Батырҙар, әйҙәгеҙ!" - тип, саҡырып алды...

● Уйындарға йыйылыусы балалар хоккейҙан тыш, олимпия уйындары исемлегенә индерелгән сноубординг, тау саңғыһы, фигуралы шыуыу, шорт-трек, шулай уҡ спорт ориентиры төрҙәре буйынса ярышты. Саралар баш ҡаланың "Олимпик-парк" тау саңғыһы комплексында, Спорт һарайында, "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында, "Өфө-Арена" боҙ һарайында үтте. Ябылыу тантанаһын 3 мартта Спорт һарайында тамаша ҡылырға мөмкин. Инеү бушлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**VI Халыҡ-ара балалар уйындары илдәр араһындағы дуҫлыҡты, хеҙмәттәшлек ептәрен нығытырға, яңы танышлыҡтар, эшлекле мөнәсәбәттәр булдырыуҙы ла күҙ уңынан тота. Күп кенә ҡалалар мәрҙәрының да килеүе ошо хаҡта һөйләй. Тағы ла, Уйындарға бүленгән аҡсаға Өфөнөң Олимпик-паркында тау саңғыһы буйынса спорт мәктәбе төҙөләүе лә беҙҙең өсөн бик әһәмиәтле. Йәнә, бөгөнгө ярыштар автоматик рәүештә Өфө ҡалаһын Балалар уйындары картаһына теркәне. Артабанғы йылдарҙа башҡорт спортсылары һәр уйынға саҡырыу ҡағыҙы аласаҡ.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ 11 мартта Өфөнөң Конгресс-холында Башҡорт шаяндар һәм отҡорҙар лигаһының беренсе миҙгеле финалы үтә. Финалда Өфө, Стәрлетамаҡ, Сибай ҡалаларынан, Ейәнсура, Учалы райондарынан алты команда ҡатнашасаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, яңы йәмәғәт ойошмаһы Шаяндар һәм отҡорҙар клубы иселе аҫтында 2012 йылдың 16 июнендә булдырылды. Башҡорт телендә Шаяндар һәм отҡорҙар клубы хәрәкәтен үҫтереү, республика йәштәренең ижади мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итеү, йәштәр араһына башҡорт телен популярлаштырыу, йәштәрҙе милли мәҙәниәткә һәм йәмәғәт тормошона йәлеп итеү ойошманың төп маҡсаттары булып тора.

✓ БР Милли музейы фондтарынан "Башҡорт халҡының матди мәҙәниәте" исемле күсмә күргәҙмә Ханты-Манси автономиялы округының ҙур мәҙәниәт учреждениеларының береһендә - Тәбиғәт һәм Кеше музейында тәҡдим ителә. 24 мартҡа тиклем Ханты-Манси ҡалаһында йәшәүселәр Башҡортостан Республикаһының төп халҡы мәҙәниәте менән танышасаҡ. Экспозицияла биҙәүестәр, милли костюмдар, биҙәү-ғәмәли сәнғәт әйберҙәре, өй кәрәк-яраҡтары, һауыт-һаба һәм тирмә өлгөләре тәҡдим ителә.

✓ Көньяҡ Урал мәмерйәләрен һаҡлау һәм рациональ файҙаланыу мәсьәләләре 1-3 мартта Бөрйән районында беренсе фәнни-ғәмәли семинарҙа тикшерелә. Семинарҙа "Башҡортостан Уралы" биосфера резерваты составына ингән айырыуса һаҡланған тәбиғәт территорияларының 40-ҡа яҡын хеҙмәткәре, спелеологтар ҡатнашасаҡ. Семинар программаһында ғилми-популяр лекциялар, тематик экскурсиялар, шулай уҡ мәмерйә биләмәһен сүп-сарҙан таҙартыу буйынса саралар ҡаралған.

✓ "Яҡташтар" проектының тәүге этабы Башҡортостандың барлыҡ райондарында тамамланды. Ирекмәндәр республиканың һәр ауылында өй беренсе йөрөп, халыҡты данлыҡлы яҡташ исеменә дәғүә итеүселәр исемлеге менән таныштырҙы. Исемдәре икенсе этапҡа үткән кешеләр тауыш биреү йомғаҡтары буйынса билдәләнәсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, республиканың яңы проекты 2012 йылдың ноябрендә старт алды. Райондарҙың ысын геройҙарын, ихтирам ҡаҙанған, халыҡтың ышанысын яулаған абруйлы кешеләрен асыҡлау проекттың төп маҡсаты булып тора.

*ШУНДАЙ ХӘЛДӘР*

**Ҡала округы хакимиәте башлығы Сынтимер Баязитовтың мәғариф мәсьәләләре буйынса уҙғарған матбуғат конференцияһында тап шундай һорау күтәрелеүе лә юҡҡа түгел. Сөнки һуңғы ваҡытта ҡабул ителгән закондар халыҡты, ысынлап та, хәүефләнергә мәжбүр итте. Ә инде XXI быуат мәктәбе белем биреү комплексын булдырыу яңы мәктәптәр төҙөгәндә мотлаҡ иҫәпкә алынырға тейешлеге лә хафаларҙы арттырҙы. Ул мәктәп ниндәй булырға тейеш?**



# XXI БЫУАТТА...

## бушлай белем алырҙармы?

Сынтимер Биктимер улы белдереүенсә, XXI быуат мәктәбе фәнни һәм фәнни-тикшеренеү эшмәкәрлеген үҫтереүҙең юғары кимәлен, белем биреү процесының тулыһынса информатив булыуын (былтыр 2800 ноутбук алынған, 128 мәктәп өҫтәмә рәүештә компьютер кластары менән йыһазландырылған), белем биреүҙе индивидуалләштереү, ғәҙәти булған класс-дәрес системаһынан баш тартыуҙы күҙаллай. Шулай уҡ яңы белем биреү - ул аҡыллы белем (Smart education) - ирекле ҡулланылышта булған бөтөн донъя контенты ярҙамында интерактив мәғариф мөхитендә белем алыу. Икенсенән, ул заманса инфраструктуралы, үҙенсәлекле архитектуралы һәм дизайнлы, тәмле һәм сәләмәт аҙыҡ тәҡдим иткән ашханаһы, медиатека һәм китапханаһы, юғары технологиялы уҡытыу ҡорамалдары, спорт һәм ижад менән шөғөлләнеү өсөн шарттары булған мәктәп-комплекс. Һәм бында белем биреүҙең түләүле йәки бушлай булыу-булмау мәсьәләһе үҙенән-үҙе ҡалҡып сыға: ә бит ундай мәктәп-комплексын тотоу, ҡарау, хеҙмәтләндереү өсөн сығымдар ҙа талап ителә, шул уҡ ваҡытта закон белем биреүҙең төрлө типтағы учреждениеларын яйлап ҡына үҙ-үҙен финанслауға күсерергә ниәтләй. Тимәк, һорау асыҡ ҡала: белем биреү түләүлегә әйләнерме, әллә бушлай булып ҡалырмы?

Закон билдәләүенсә һәм ҡала мәғариф идаралығы белгестәре әйтеүенсә, федераль дәүләт белем биреү стандарттарында (ФГОС) ҡаралған предметтар барыһы ла бушлай уҡытыласаҡ. Ә инде өҫтәмә белем алырға теләге булғандар һәр дәрес өсөн түләргә тейеш була. Бер сәғәт өҫтәмә белем алыу 50 һум тора. Дөйөм сумма баланың нисә сәғәт өҫтәмә белем алыуынан сығып билдәләнә. Һарыҡ та туҡ, бүре лә иҫән кеүек. Сөнки Рәсәй Федерацияһының Төп Законының 43-сө статьяһы (2-се пункт) төрлө кимәлдәге белем алыуҙың барыһына ла мөмкин булыуын һәм уның түләүһеҙ булыуын гарантиялай. Ләкин миҙалдың икенсе яғына ҡарағанда, ФГОС исемлегенә инмәгән предметтар йә уҡытылмай ҡаласаҡ, йә уларға түләргә хәленән килгән ғаиләләрҙең балалары ғына йөрөйәсәк. Был үҙе үк халыҡты байҙар һәм ярлыларға (синфи бүленешкә ҡабат кире ҡайтыу) бүләсәк. Шулай уҡ өҫтәмә белем тип һаналған консультациялар, факультативтар ҙа түләүлегә әйләнһә, балалар мәктәптән ниндәй белем менән сығасағы ла һорау тыуҙыра. Шул уҡ ваҡытта бушлай уҡытылған дәрестәрҙә уҡытыусының балаға етерлек күләмдә белем биреүе лә бик икеле, ә был инде үҙ сиратында мотлаҡ өҫтәмә белем алыуҙы талап итәсәк. Хәйер, шундай хәлдәргә юл ҡуймаҫ өсөн дә, бәлки, дәүләт власы органдары уҡытыусыларҙың эш хаҡын күтәреүгә йүнәлеш алғандыр. Бөгөн баш ҡала уҡытыусыларының уртаса айлыҡ эш хаҡы 20 мең һумдан ашыу тәшкил итә. Был сумма уларҙың дәрес сәғәтенә ҡарап артыуы ла мөмкин.

Әйткәндәй, БР Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә балаларҙа креатив, инновацион фекерләүҙе үҫтереүгә булышлыҡ иткән заманса белем биреү-мәғлүмәт мөхитен формалаштырыуҙа мәғариф системаһының ролен аныҡ билдәләне. Шундай фекерләүгә эйә булмайынса, ысынлап та, мәғариф өлкәһенә ҡағылышлы ҡануниәттәге яңылыҡтарҙы балалар аңламаясаҡ...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТОРЛАҠТЫ...

## хосусилаштырыу оҙайтылды

**1992 йылдан алып торлаҡты бушлай хосусилаштырыу мөҙҙәте ике тапҡыр күсерелгәйне инде. Ошо көндәрҙә яңы закон проекты РФ Дәүләт Думаһына тәҡдим ителеп, ул бер юлы өс уҡыуҙы ла бер көндә үтте һәм торлаҡты бушлай хосусилаштырыу ваҡыты 2015 йылға тиклем оҙайтылды.**

Хәҙер инде тарихта ҡалған элекке закон буйынса, торлаҡты бушлай хосусилаштырыу быйыл 1 мартта тамамланырға тейеш ине. Әммә шул уҡ ваҡытта Рәсәй хәрбиҙәре өсөн ул 2015 йылдың 1 мартына тиклем тип билдәләнгәйне. "Граждандар бер тиң хоҡуҡҡа эйә булырға тейеш. Кемдер торлағын хосусилаштырыу хоҡуғын алып, икенсе категория был хоҡуҡтан мәхрүм ителеүе дөрөҫ түгел", - тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин. Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, әлеге ваҡытта илдә миллионлаған кеше төрлө сәбәптәр арҡаһында торлағын шәхси милеккә күсереүҙе һуҙып килһә, яңы йылдан һуң эре ҡалаларҙың теркәү органдарында ҙур сираттар хасил булды. Баш ҡалала ла торлаҡтың 15 проценты шәхси милеккә күсеп бөтмәгән. Бушлай хосусилаштырыуҙың ваҡытын оҙайтыу тәү сиратта социаль яҡлауһыҙ граждандарҙы - пенсионерҙарҙы, ветерандарҙы, инвалидтарҙы һәм етем балаларҙы яҡлау сараһы ла булып торасаҡ. Сөнки торлағын шәхси милеккә күсермәүселәрҙең күпселеген ошо категория тәшкил итә.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# АЛДАНҒАНДАРҒА ЛА...

## бәхет йылмайыр

**Бәхет тураһында һүҙ сыҡһа, ғәҙәттә, уны үҙеңде күктең етенсе ҡатында итеп тойоу менән сағыштырабыҙ. Кем унда булып ҡарағандыр, билдәһеҙ, әммә баш ҡала халҡының ҡайһы берәүҙәре өсөн "Күктең етенсе ҡаты" бер ҙә генә бәхет төшөнсәһе менән күҙалланмай. Һүҙ - фатирлы булам йәки фатир майҙанын киңәйтәм, тип, төҙөлөшкә барлы-юҡлы аҡсаһын һалып, алданған өлөшсөләр хаҡында. Баш ҡалала төп башына ултырыусыларҙың бер өлөшө тап шулай - "Күктең етенсе ҡаты" тип аталған объекттың исеменә ҡарап уяулығын юғалтҡандыр ҙа, бәлки.**

Баш ҡала округы хакимиәтендә үткән сираттағы матбуғат конференцияһында ҡала округы башлығының беренсе урынбаҫары Александр Филиппов былтыр Өфөлә торлаҡ төҙөлөшө буйынса алып барылған эштәргә йомғаҡ яһаны һәм, әлбиттә, алданған өлөшсөләр темаһын да урап үтмәне.

Баш ҡалала торлаҡ төҙөлөшө биш социаль йүнәлештәге программа буйынса алып барыла: иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙа йәшәүселәрҙе яңы фатирҙарға күсереү; етем балаларҙы фатир менән тәьмин итеү; социаль ипотека; предприятиеларҙың үҙ хеҙмәткәрҙәренә социаль торлаҡ төҙөүе; алданған өлөшсөләрҙең проблемаһын хәл итеү. Былтыр авария хәлендәге 19 йорттан 562 кеше күсерелгән (235 фатир). Бөгөн Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалауға ярҙам итеү фондында 2007-2012 йылдарҙа башҡарылған эштәр буйынса йомғаҡлау отчетын беренселәрҙән булып яҡланы һәм ошо йүнәлештә өҫтәмә бонустар көтә. Рәсәй Хөкүмәтенең сәйәсәте шундай - улар бүленгән аҡсаны уңышлы һәм ваҡытында үҙләштергән төбәктәргә өҫтәмә аҡса бүлә. Был программа тағы ла өс йылға оҙайтылған һәм 2012-2015 йылдарға ошо программала 500 йорттоң ҡатнашыуы күҙаллана ла инде. Яҡынса фаразлағанда, дөйөм финанслауҙың күләме өс тапҡырға артасаҡ.

Етем балаларҙы фатир менән тәьмин итеү маҡсатында былтыр 79 фатир муниципаль милеккә алынған. Быйыл был һандың тағы ла күберәк булыуы көтөлә. Социаль ипотека һәм предприятиеларҙың үҙ хеҙмәткәрҙәренә социаль йорттар төҙөүе лә хуплауға лайыҡ. Әлеге ваҡытта социаль ипотека буйынса 236 фатирлы ике торлаҡ йорт төҙөлөшө бара. Уларҙағы фатирҙарҙың квадрат метры 30 меңдән саҡ ҡына артығыраҡ буласаҡ. Фатирҙарға бөгөнгө баҙар хаҡтары менән сағыштырғанда, был һиҙелерлек арзан, тиергә мөмкин. Ә инде предприятиелар төҙөгән йорттар нигеҙҙә Калинин районының Максимовка ҡасабаһында ҡалҡып сыға. Бөгөнгә ҡала предприятиеларының 331 хеҙмәткәре ошо программа буйынса фатирлы булған да инде.

Һәм ҡала хакимиәтенең иң теңкәһен ҡороҡҡан мәсьәлә - алданған өлөшсөләр проблемаһы. Былтыр (2011 йылда төҙөлгән йорттарҙы ла иҫәпкә алып) 9 йорт файҙаланыуға тапшырылған. 723 өлөшсөнөң торлаҡ проблемаһы хәл ителһә, бөгөнгә 1359 кеше ыңғай сиселеш көтә. Быйыл йыл һуңына тиклем тағы ла 10 йорттоң тапшырылыуы планлаштырылған.

Әйткәндәй, ҡала хакимиәтенең һәм граждандарҙың баш ауырыуына әйләнгән парковкалар мәсьәләһендә лә "боҙ ҡуҙғалды" тиергә мөмкин. Ошо арала баш ҡалала пилот проекты булараҡ эшләнгән беренсе муниципаль парковка асыласаҡ. Икенсеһе йәйгеһен М. Ғафури исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркында төҙөлә башлясаҡ. Артабан инде бындай парковкалар бөтөн ҡала буйынса асыласаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Аҙ ҡанлылыҡтан

Ҡыҙыл сөгөлдөр менән кишер һуты; элеутерококк (аптека препараты). Көнөнә ике тапҡыр 20-25 тамсылап ҡабул итергә; 1 балғалаҡ балды ярты стакан ҡыҙыл сөгөлдөр һуты менән болғатып, ашар алдынан ярты сәғәт элек көнөнә 3 тапҡыр ҡулланырға; оҙайлы ваҡыт ҡыҙыл сөгөлдөр, кишер, ҡара торма һутын (1:1:1) 2 ҡалаҡ эсергә; көн һайын иртәнсәк ас ҡарынға ҡырғыстан үткәрелгән 100 грамм кишерҙе ҡаймаҡ йәки үҫемлек майына болғап ашарға; көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ юл япрағы үләне һутын ҡабул итергә; тигеҙ күләмдә кесерткән һәм ҡайын япрағы алып болғатырға һәм 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашманы 300 мл ҡайнар һыу менән 3 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Тәүлек буйына 3-4 өлөшкә бүлеп эсергә. Дауаланыу курсы - 3-4 аҙна; 400 грамм сифатлы шоколадты ҡырырға, һөҙгөс аша үткәрергә һәм уға шәкәр менән туҡылған йомортҡа һарыһы һәм алма ҡушылған иретелгән май өҫтәргә. Болғатырға, һыуытырға. Килеп сыҡҡан ҡушылманы икмәккә һылап, көнөнә 3-4 мәртәбә ҡайнар һөткә ҡушып ашарға.

### Организм хәлһеҙләнһә

❖ 300 грамм әстерхан сәтләүегә, 300 грамм күрәгә, 300 грамм йөҙөм, 2 лимон (тышы менән) алып, уларҙың барыһын да ит турағыс аша үткәрергә һәм 300 грамм бал өҫтәргә. Көнөнә 1-2 балғалаҡ ашарға. Һыуытҡыста һаҡларға.

❖ Традицион Тибет медицинаһына ярашлы, имбир (тамыры эфир майҙарына бай тропик үҫемлек) организмдағы энергия хәрәкәтен һәм балансын тергеҙә, шуға ла иртән ас ҡарынға бер сынаяҡ имбир сәйе эсеү көн буйына етерлек көскеүәт бирәсәк.

❖ Арыуҙы бөтөрөү һәм йөрәктең эшмәкәрлеген еңеләйтеү, көс йыйыу өсөн алма һеркәһе ҡабул итергә мөмкин. 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ алма һеркәһе һәм 1 балғалаҡ бал өҫтәп, 10-15 көн дауамында 1-2 тапҡыр ашар алдына йәки ашағандан һуң ҡабул итергә.

❖ Бөрйән урмандарында бәғәнәш тип атап йөрөтөлгән үлән үҫә. Белгестәр уны воронец колосовидный йәки краснoплодный тип йөрөтә. Минең әсәйем сайыр йыйыу мәлендә шуның тамырын йыя торғайны. Организм арып киткән саҡта был тамырҙың бер-ике сыбыҡсаһын бер стакан ҡайнар һыуҙа бешереп, ас ҡарынға көнөнә 2-3 тапҡыр эсә ине. Борон әсегән балға ла бәғәнәш өҫтәгәндәр, ауыр эштән һуң был балды эсһәң, шунда уҡ көс инеп киткән.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Егерме етенсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Дин үсеше фәнгә ҙур йоғонто яһаған. Борон-борондан башҡорт ғалимдарының күбеһе тәүге белемдәрен мәҙрәсәләрҙә алған, унан һуң сит илдәргә барып белем эстәп ҡайтыр булған. Мәҫәлән, бөйөк ғалимыбыҙ, философия докторы, шәрҡиәтсе һәм төркиәт белгесе Зәки Вәлиди мулла ғаиләһендә тыуған, Ҡаҙанда "Касимиә" мәҙрәсәһендә уҡыған, унан һуң ошо уҡ мәҙрәсәлә үҙе төрки тарихын, ғәрәп һәм төрки әҙәбиәт тарихын уҡытҡан. Башҡорт яҙыусыһы, ғалим, мәғрифәтсе, шәрҡ телдәре белгесе Ризаитдин Фәхретдинов иң тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә уҡыған. Мәғрифәтсе-шағир, ғалим Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев башланғыс белемде мәҙрәсәлә ала. Бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич мулла ғаиләһендә тыуа, башланғыс белемде мәҙрәсәлә ала. Башҡортостандың иң беренсе халыҡ шағиры Мәжит Ғафури Троицк ҡалаһында Зәйнулла ишан мәҙрәсәһендә, артабан Ҡаҙанда "Мөхәммәҙиә" һәм Өфөлә"Ғәлиә" мәҙрәсәләрендә уҡый. Шулай итеп, дини мәҙрәсәләр белем алырға теләгән береһенә лә юл япмаған, киреһенсә, уҡыу-яҙыу һөнәренә өйрәтеп кенә ҡалмаған, ә зиһенле балаларҙа белем алыуға ҡыҙыҡһыныу уятҡан.

**Хәҙис шәриф**

*Ғилем - бикле хазиналыр,*
*Асҡысы бына ҡайҙа:*
*Иң дөрөҫ яуап табыуҙа*
*Иң ауыр һорауҙарға.*

## Егерме етенсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Мәрхәмәтлек. Был донъяла барыһы ла имен-аман, теүәл ағзалы, атай-әсәйле булып ҡына йәшәмәй. Ярҙамға мохтаждар байтаҡ: матди ярҙамға ла, ҡул ярҙамына ла. "Урал батыр" эпосында шундай кәңәш бирелә:

*Күҙенә суп төшөрҙәй,*
*Күҙһеҙ булып ҡалырҙай,*
*Еҫерҙәрҙең алдында*
*Күҙенә керпек булығыҙ.*

"Еҫер"- "етем" тигән һүҙ. Тимәк, ярҙамсыһыҙ ҡалған етемдәрҙең иң яҡыны булығыҙ, тип әйтелә. Ярҙамға мохтаждарға ни менән булһа ла ҡулығыҙҙан килгән тиклем ярҙам күрһәтегеҙ. Ул һеҙҙең күңелегеҙгә тыныслыҡ, киңәнес, ҡыуаныс бирер. Күңел тыныслығы - сәләмәтлек ул. Был хаҡта әйтелә килә. Уҡыусы шуны аңлаһын. Кешенең рәхмәте үҙенә ҡайта, тигән һүҙ күңел тынныслығы аша сәләмәтлек булып ҡайта, тигән мәғәнәлә. Рәхмәтле кешенең теләге, ихлас йылмайыуы күңелгә рәхәтлек, йыуаныс бирә.

**Хәҙис шәриф**

*Күрһәттеңме, әҙәми зат,*
*Етемдәргә рәхим-шәфҡәт?*
*Етемде бит яклаусы юҡ,*
*Күргәне йот, йотҡаны ут.*
*Артҡа ҡарай - атаһы юҡ,*
*Алға ҡарай - әсәһе юҡ,*
*Ашар ине - ашарға юҡ,*
*Эсер ине - эсәһе юҡ.*

## Егерме етенсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Этикет. "Тормош һабаҡтары"ның бишенсе класс дәреслеге "Әҙәплелек ҡағиҙәләре" тигән теманан башлана. Шулай уҡ кластан тыш уҡыу ҡулланмаһында ла был тема дауам итә. Ҡабатлап яҙып тормайбыҙ, дәреслектәге әҙер материалды файҙаланығыҙ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

АТЫҢ КЕМ?

**Мин бик ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле һөйләшеү ишеткәйнем. Беҙҙең ауылға ситтән төшкән килен, ҡыҙы тыуғас, үҙенең башҡа районда йәшәгән әсәһе менән балаһына исем һайлау буйынса кәңәшләшеп алырға булған. Әсәһе йәш киленгә Эвелина, Алина, Аделина исемдәрен тәҡдим иткән, ә йәш әсә: "Әсәй, Ибрайҙа ундай исем ҡушмайҙар!"- тип яуап биргән.**

# АУЫЛЫМДАҒЫ...

## гүзәл заттар исеме тарихынан




Ә беҙҙең ауылда балаларға ниндәй исемдәр ҡушалар һуң? Башҡа яҡтарҙан айырыламы икән улар? Башҡорт ауылында ҡушылған ир-егет исемдәре үҙенең шәжәрәһен дауам итерлекме? Киләсәктә әсә буласаҡ ҡыҙҙарҙың исемдәре балаларына фәһем бирерлекме? Мин ошо һорауҙар буйынса ҡыҙыҡһына башланым. Бик мауыҡтырғыс булып сыҡты исемдәр донъяһы! Әсәйем дә һәр ваҡыт кешенең исеменә айырым иғтибар бирә, беҙгә, балаларына ла, матур, мәғәнәле исемдәр һайлағандар: ағайҙарымдың исемдәре - Таһир менән Заһир, һеңлем - Гөләндәм. Башҡорт балаларының исемендә мотлаҡ телебеҙгә хас үҙенсәлекле өндәр булырға тейеш, тип иҫәпләй әсәйем. Мине бигерәк тә ауылдаш ҡатын-ҡыҙҙар исемдәренең мәғәнәһе ҡыҙыҡһындырҙы. Үҙ эшемдә 1816 һәм 1859 йылғы "Ревизские сказки" мәғлүмәттәрен өйрәнеүҙән башланым. 1816 йылда Урмансы ауылында (Ибрайҙың элекке исеме) гүзәл заттарға Зөләйха, Фатима, Хәбибә, Әминә, Мәҙинә, Мөъминә, Ғәйшә, Мәхүбә, Илсебикә, Аҙнабикә, Хәлимә, Назбикә, Әлимә, Ынйыбикә, Мөслимә, Кинйәбикә, Гөлөстан, Гөлбостан кеүек исемдәр ҡушылған. Был исемдәр араһында дингә бәйләләре, сафлыҡ, паҡлыҡ, матурлыҡ, камиллыҡ, егәрлелек, эшкә маһирлыҡ, байлыҡ мәғәнәһенән белдереүселәре күп. Тимәк, был осорҙа ҡыҙҙарҙа тап ошо сифаттар юғары баһаланған.

Шул уҡ ваҡытта бик ҡыҙыҡлы Көҙәкләү, Зыянбикә, Зәғифә, Ҡуяса, Ҡаныша, Үтәбикә, Байсолтан, Байбикә, Йомасолтан, Көсөкбикә, Таныҡбикә, Мәрҙәнә, Ҡарсәсәк, Йоғарбикә, Мөһирә, Нәзербикә, Буллыбикә, Сәфәрбикә, Көҙбикә, Бикмала, Тарбикә, Торһонбикә һымаҡ исемдәр ҙә осрай. Был исемдәрҙең дүртәүһе генә "Башҡорт исемдәре " китабына ингән (Байбикә, Үтәбикә, Танныҡбикә, Йоғарбикә). Таныҡбикә, Үтәбикә, Торһонбикә, Көсөкбикә, Нәзербикә, Буллыбикә бик көтөп алынған ҡыҙҙар булғандыр, ә Тарбикә - күп ҡыҙлы ғаиләлә донъяға килгәндер, Көҙәклә, Зәғифәләр, бәлки, бик үк сәләмәт булмағандарҙыр. Мөһирәнең, моғайын, берәй ерендә мөһөрө - миңе булғандыр. Ҡарсәсәк умырзаялар сәскә атҡанда тыуғандыр. Шулайыраҡ фараз иттем бөгөн хәтерҙән юйылған был исемдәр тураһында.

1859 йылдағы иҫәп алыуҙа ла бик ҡыҙыҡлы исемдәр осраттым. Был исемлектә Малбикә, Көсөкбикә, Илсебикә, Сидәкә, Һөйәрбикә, Һөймәсбикә, Баҡмала, Миһырбаныу, Ҡунаҡбикә, Баяна, Зәмәшә, Хазина, Теләүбикә, Гөлзәғифә, Татлыбикә исемдәре бар. Был исемдәрҙән дә ҡыҙҙарҙың тыуыу тарихын самаларға була. Ә иң йыш ҡулланылған исемдәр Ҡанифә, Сәхипъямал, Хөбибъямал, Шәрифъямал, Хәйерниса, Нәзифә, Зәлхизә, Әминә, Ғәйникамал, Сәғиҙә, Мәғлифә, Хәснимал, Зәйнәп, Фатима, Мәлихә, Зөләйха, Зәлҡағиҙә, Хәнифә, Хәҙисә, Шәһербаныу, Нәфисә, Бибиғәйшә. Ныҡ таралғандар араһында ай, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ҡыҙы һәм ҡатыны исемдәре; ғәрәп, фарсы теленд. матур, һөйкөмлө, саф, изге күңелле, мул, бәхетле тормош мәғәнәһен аңлатыусы исемдәр яратып ҡушылған.

Тағы ла шуға иғтибар иттем: 1859 йылда ҡушма исемдәр йөрөтөүселәр күп. Мәҫәлән, хужабикә ханым мәғәнәһен биреүсе "биби" һүҙе менән 11 төрлө исем яһалған: Бибиғарифа, Бибилатифа, Бибиғәйшә, Бибисара, Бибихәҙисә, Бибихәтирә, Бибизарифа, Бибикамила, Бибимәстүрә, Бибихәлифә, Бибифатима. Ә матур, күркәм мәғәнәһендәге Ямал менән 15 исем бар: Сәрбиямал, Ғәйниямал, Лотфиямал, Бәҙриямал, Мәхүпъямал, Гөлъямал, Хәсниямал, Фәрхиямал, Хәбибъямал, Бәҙегөлъямал, Хәббиямал, Шәмсиямал.

Хәҙерге заманда ҡыҙҙарға ниндәй исемдәр ҡушылыуын белер өсөн 1985-2008 йылғы исемлекте өйрәндем. Әгәр 1990 йылдарға тиклем Юлиә, Резеда, Регина, Лена, Лиана, Зирина, Зарина һымаҡ башҡорт теленән булмаған исемдәр йыш осраһа, 1990 - 2000 йылдарҙа күберәк милли исемдәргә өҫтөнлөк бирелә. Был илдәге ваҡиғаларға (Башҡортостандың үҙаллылыҡ яулауы, милли үҙаң үҫеүе) бәйлеләр. Гөлсиә, Гөлдәр, Гөлнур, Гөлиә, Гөлгөнә, Гөлнара, Гөлфинә, Гөлфиназ, Назгөл, Гөлназ, Гөлназ, Гөлсәсәк, Томбойоҡ, Сөмбәл, Нәркәс, Лилиә, Фаягөл һымаҡ сәскә атамалары; Гөлсибәр, Таңһылыу, Дилбәр, Сәлимә, Зәлифә, Зөлфиә, Айзилә кеүек матурлыҡты күрһәтеүсе һәм Зөһрә, Ләйсән кеүек тәбиғәт күренештәре исемдәре бар. 2000 йылдарҙан башлана ла инде бер-береһен ҡабатламаҫ үҙенсәлекле исемдәр! Түбәндәге гүзәл исемдәрҙе ошо исемлеккә индерергә булыр ине: Камила, Әҙилә, Гөләндәм, Нәргизә, Заһизә, Әминә, Әмилә, Мәликә, Алтынай, Таңсулпан һ.б.

Балаһын ысын йөрәктән яратҡан, уның һәр яҡлап та камил да, сибәр ҙә, тыйнаҡ, тоғро, егәрле лә булыуын теләгән матур күңелле ата-әсәләр ҡушҡан был исемдәрҙе, тип ышаныслы әйтә алам. Ошо өс осорҙоң исемдәрен өйрәнгәндән һуң, нимәләрҙе айырып әйтергә була? Бер осорҙа ла ата-әсәләр балаға осраҡлы исем ҡушырға тырышмаған: ул йә баланың тыуған осороно, айырым билдәләренә, йәниһә киләсәктә бәләкәстәрен ниндәй итеп күрергә теләүҙәренә (бәхетле, аҡыллы, тәүфиҡлы, һау, оҙон ғүмерле һ.б.) ҡарап һайланған. Ҡыҙҙарҙа матурлыҡ, изге күңеллелек, сафлыҡ, һәр яҡлап та камиллыҡ сифаттары юғары баһаланған. Уларҙың гөл-сәскәләй нәфис булыуын теләгәндәр. Был сифаттар XIX быуатта аҡ, маһи (ай һымаҡ), сара (бик шәп), хәсни (бик матур), шәмси (ҡояш һымаҡ) һүҙҙәре менән бирелһә, XX быуаттарҙа ул гөл, нур, сибәр һүҙҙәре менән алышынған. Элек-электән исемдең кеше яҙмышына тәьҫир итеүе, яҙмышын билдәләүенә ышанғандар. Беҙ хатта исеменә ҡарап кешенең ниндәй миләттән булыуын билдәләй алабыҙ. Башҡорттоң да исеме уның башҡортлоғон күрһәткән билдәгә әйләнһә икән. Сөнки исемдәребеҙ араһында үҙендең зауығына, теләгенә ҡарап һайлап алырлыҡтары етерлек. Тик ул матур мәғәнәле, әйтелеше ҡолаҡҡа ятышлы булырға тейеш.

**Таңһылыу ҠОЛМӨХӘМӘТОВА,**
**Ейәнсура районы Ибрай урта мәктәбенең X класс уҡыусыһы.**

ҮӘТ ӘЙ!

# ҺҮҘГӘ ЛӘ...

## һүҙ бирәйек!

**Башҡорт дәүләт филармонияһының Ҙур залында Туған тел байрамы була, тигәнде ишеткәс, беҙҙең эш сәғәте бөтөп, унда барып еткәнсе, урын да ҡалмаҫ, баҫып торорға тура килер микән, тип хафаға ҡалғайныҡ.**

Шулай тулҡынланып, урын өсөн хафаланып, ашығып килеп инеүгә, филармония залындағы тын һиллек күңелде уғата яңһытып ебәрҙе: әллә башлап та ебәргәндәр? Әллә байрамды икенсе урынға күсереп тә, беҙ белмәй ҡалдыҡмы, әйтәгүр! Улай тиһәң, ана, Рәшит Шәкүр, Хәсән Назар, Риф Тойғон ағайҙар күренә, Мәрйәм апай Бураҡаева ла таныштары менән тыныс ҡына әңгәмәләшеп тора. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты уҡытыусылары ла ҡабаланмай ғына алғы рәттәргә үтеп, үҙҙәренә уңайлы урындарҙы биләне. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев менән медицина фәндәре докторы, профессор Марс Юлдашевты күреп тә күңелгә йылы йүгерҙе: тимәк, бында үҙ телен, илен һөйгәндәр, уға битараф булмаған кешеләр генә йыйылған. Кемдәрҙең исемдәре телгә алынманы, улар үпкәләмәһен - беҙ бит отчет өсөн йә булмаһа йәмәғәтселек күҙенә салыныр өсөн түгел, ә телебеҙ, тарихыбыҙ һәм мәҙәниәтебеҙ мәртәбәһен арттырыу, уны күтәрмәләү маҡсатында, йәнә лә күңелебеҙҙе, зауыҡыбыҙҙы

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



### Ристан юлы

Шулай итеп, Ур (Орск) нығытмаһынан беҙҙең төбәккә Таналыҡ, Уртаҙым, Ҡыҙыл, Әтәс (Магнит), Үрге Урал, Уҡлы Ҡарағай, Карагайский, Уйский, Күңгерәү, Сыбаркүл крепостары төҙөлә. Петр Иванович Рычков үҙенең "Топография Оренбургской губернии" тигән китабында Мейәс крепосы тураһында түбәндәгеләрҙе яҙа:

"Миасская крепость от старых жительств самая первая. От Оренбурга 599 верст. Построена она на реке Миассе. В ней служивых казаков 143 человека. Укрепление ее оплотом деревянным, забранным в столбы, и одна башня проезжая, а кругом ее рогатки и надолбы".

Беҙҙең тирә ҡәлғәләрҙең күплеге менән айырыла. Ер урҙары, һыу йыуынтылары, таш ҡоймалар, баған-бүрәнәләр менән уратылып, эсендә ҡоралды һалдаттар тулы булған. Ҡара Табын, Барын-Табын ерҙәрендә Силәбе, Күңгерәү, Үрге Өйәл, Түбәнге Өйәл, Эткүл, Сыбаркүл, Уй (Уйск), Ҡойойылға, Һанар, Кисегәш һәм башҡа бик күп ҡәлғәләр төҙөлә. Уларҙың күплеге империяға баш һалмаған көнсығыш табындарының бик ныҡышмалы булыуын һәм ғәййәр көрәшеүҙәрен күрһәтә. Ләкин ул ныҡышмалылыҡтың икенсе яғы ла бар. Ерҙе тартып алыр өсөн бик күп урыҫ халҡы килеүенә сәбәп була. Һәр ревизия һайын "тридцатипятиметровая полоса", "двадцати пятиметровая полоса"ларҙан ҡыуып, башҡорттарҙы Тубыл ярынан Урал тауҙары араһына тиклем ҡыҫалар. Ҡаты үләнле көтөүлектәр, икмәк үҫтерә торған ҡалын ҡара тупраҡлы башҡорт ерҙәре, казак булмаһалар ҙа, казак тип аталған күскенсе урыҫ крәҫтиәндәренә бирелә. Улар Булығаның (Волга) көнбайышынан Амур йылғаһына, Камчаткаға тиклем барып етә. Әйтергә кәрәк, шул 8-9 мең саҡырым күсенеү осорҙарында уларға ҡаршы 200 йыл буйы ғәмәлдә башҡорт халҡы ғына көрәшкән, әгәр Ибер - Себер төркиҙәрен иҫәпләмәһәк.

Беҙҙең тирәлә халыҡҡа иң яуызлыҡ эшләгәндәре Сыбаркүл һәм Үрге Яйыҡ ҡәлғәһе була. Азатлыҡ өсөн көрәшеп әсир булған барлыҡ башҡорт яугирҙары шул ҡәлғәләрҙә язалана, йәки Себергә ауыр каторга эштәренә оҙатыла. Омск, Томск, Новосибирск, Иркутск кеүек ҡалалар йә һәр төрлө һуғыштарҙа әсир булғандар, йә каторжниктар, сәйәси әсирҙәр көсө тарафынан төҙөлгән. "Отдаленная местность ссыльных каторжан"ды Омск тип уҡыйбыҙ. "Таежная отдаленная местность ссыльных каторжан" булһа, Томск тип аңлайбыҙ.

1734 йылда Үрге Яйыҡ (Верхнеуральск) төҙөлә башлай. Ул аҙыҡ-түлек, әйбер ташыр өсөн һыу юлы пристане итеп күҙалланһа ла, был тәғәйенләнеште үтәй алмай, ә Башҡорт ерен талау, яндырыу өсөн үҙәк крепосҡа әйләнә. Йырға һалынған Буранбай батыр менән Ибраһимды, "Малбай" йырындағы Малбай яугирҙы һәм башҡа бик күптәрҙе күргән Верхнеуралдың ер аҫты төрмә-ҡаҙымәттәре. Ниндәй генә тотҡондар күрмәгән ул. Башкиҫәрҙәрҙе лә, шымсыларҙы, сәйәси тотҡондарҙы, азатлыҡ һөйөүсе, илен, халҡын ҡурсалап сығыусыларҙы ла...

Был юлдарҙың авторына шул төрмәгә машина ремонтларға бирергә тура килде. Ҡыҙыҡһыныуым көслө ине. Хужалар менән уртаҡ тел табып, ер аҫтындағы казематтарҙың бер нисәһен ҡарай алдым. Тышҡы төҙөлөшө менән ҡалалағы өс-дүрт ҡатлы йорттарҙан бер нәмәһе менән дә айырылмаған бинаның тәүге ҡатынан уҡ өс-дүрт ҡатлы тимер ишектәр аша үткәс, иңкешләп ер аҫтына юл алаһың. Ҙур йөк машинаһы һыймалы ер тишеге яйлап ҡына түбәнгә төшә. Стеналар, түшәм, юл бетон һәм кирбес менән көпләнгән. Һалҡын, еүеш, алдан ел өрә. Күрәһең, ер өңөгө ярайһы оҙондор. Әммә яҡтылыҡ ялт итеп тора. Бара торғас, ике яҡлап та бер-береһенә ҡапма-ҡаршы, әммә залдан ике метр самаһы төптә бик бәләкәй, тутлап бөткән ауыр, ҡалын суйын ишектәр күренде. Һәр ишектә тыштан ғына асып ҡарай торған ҡапҡаслы бик бәләкәй тишектәр бар. Оҙатып йөрөүсенән бер ишек тишегенән ҡарарға һораным. Рөхсәт алғас, ул мине: "Күҙеңде тишеккә яҡын ҡуйма", - тип киҫәтте.

Ҡараным. Эстә ярым ҡараңғы. Тар, тәҙрә кеүек нәмә абайламаным. Таш тоҡ. Тимер нар өҫтөндә ябыҡ, төҫө ағарып бөткән кеше умырайып миңә ҡараны. Күҙ нурында асыу күрмәнем. Ниндәйҙер өмөтһөҙлөк һәм билдәһеҙлек, һорау, ялбарыу ине... Кирбес, бетон менән ҡоршалған ер тоғонан ҡасыу мөмкинлеге юҡтыр. Әгәр каземат стенаһын соҡоп тишкән хәлдә лә, ер өҫтөнә сығыу өсөн 10-20 метр ҡаҙырға тура киләсәк. Ә ҡайҙа сығаһың бит әле. Лагерь эсенә үк булырға тейеш. Бына шул казематтарҙың береһендә ултырҙы микән азатлыҡ дәғүәләгән егетебеҙ Малбай?

*Үрге Уралдың ере уяҙ-уяҙ.*
*Һис бер сығып булмай ҡалҡыуға.*
*Был ней ғәжәп булды, был ней хикмәт -*
*Һис бер сәбәп юҡсы сығыуға.*

Шулай тип юҡҡа йырламағандыр ул.

Ристан юлының башы - Ырымбур. Һуңғы осо йә Бирмә (Пермь) ерҙәре, Томск, йә Иркут (Иркутск). Яйыҡ, Уй, Мейәс йылғаларының буйына һалынған ҡәлғәләр, араһындағы нығытма редуттар гарнизоны көн һайын үҙ-ара осрашып торған. Бының өсөн көн һайын ике редуттан йә ҡәлғәнән бер-береһенә ҡаршы һыбайлы казак отряды сығып, билдәле ваҡытта юл уртаһында осрашып, хәбәр алышып, иртәгә ҡайһы ваҡытта осрашыуҙы билдәләп, һәр отряд үҙ редутына кире ҡайтҡан. Редуттар янына оҙон бүрәнә осона эшләнгән ултырғыстарҙа сапсаҡ менән йә ыҫмала, йә ҡоро утын булып, башҡорттар көс менән килһә, ут төртөп, бер-береһенә белдереү яһағандар. Быны улар беҙҙән отоп алған. Әсирҙәрҙе төркөм-төркөм итеп, этап менән бер ҡәлғәнән икенсе ҡәлғә төрмәһенә ҡыуғанда ла хәбәр алышыу юлға һалынған була. Мәҫәлән, Үрге Урал төрмәһенән этап менән Уҡлы Ҡарағай аша Троицк төрмәһенә тотҡондар юлға сыҡты икән, был хәбәр Магнит төрмәһенә сапҡын аша хәбәр ителгән. Нисә кеше, ҡасан, ҡайһы юл менән китеүе билдәле булғас, Магнит төрмәһе Үрге Урал төрмәһенә этап менән шунынса тотҡондо ҡыуған.

Беҙҙең район сиктәре буйлап Ристан юлының бер тармағы үтә. Ул Верхнеуральскиҙан Карагайскиға, унан Ахунға, Фоминоға-Ҡалмырҙаға, унан шул уҡ барындарҙың боронғо башҡорт ауылы Ҡолаҡтыға (1921 йылдан - Ларино) аша Күңгерәүгә, Сыбаркүл ҡәлғәһенә, Силәбегә, Ҡурғанға, ә бер айырмаһы артабан Екатеринбургҡа китә. Ахун ауылы менән Фомино-Ҡалмырҙа ауылы араһында ристандар ҡулы менән һалынған йомро ташлы юл шул ваҡыттың бөгөн дә бер шаһиты.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы. Башы 5-8-се һандарҙа).**

байытыр өсөн йөрөйбөҙ бындай кисәләргә. Шуға күрә лә ошондай сараларҙа ҡатнашлыҡ итеүҙә күпселектең, төбәп әйткәндә, әҙәбиәтсе һәм телсе ғалимдарҙың, яҙыусыларҙың, артистарҙың (бер Муллаян Сөйәрғолов ағай ғына ултырҙы), студенттарҙың һелкәүлеге, битарафлығы уғата аптыратты, әрнетте. Әлбиттә, балаларын етәкләп килгән ғаиләләрҙе лә күберәк күрге килә ине был сарала, сөнки, сәхнәгә күтәрелеп, тамашасыларҙы Туған тел байрамы менән ихлас ҡотлаған билдәле ғалимә Фирҙәүес Хисамитдинова әйтмешләй, ғаилә - әсә телен һаҡлауҙа иң кәрәкле төп фактор. Унан ҡала, телебеҙ дәүләт яҡлауына мохтаж. "Өсөнсө төп фактор - ул беҙ, йәмәғәтселек, унның бер өлөшө бөгөн бына ошо залда ултыра", - тине сығыш яһаусы. Әкренләп тамашасылар йыйылып бөткәндән һуң да буш ҡалған байтаҡ урындарҙан кисәнең аҙағынаса күңел бушлығы, бер төрлө һалҡынлыҡ бәрелеп торғандай булды...

Әлбиттә, был кисә хаҡында белмәй ҡалыусылар ҙа байтаҡ булғандыр, сөнки алдан иғландар әллә ни күренмәне һәм бик ишетелмәне. Сценарий ҙа ҡабаланыраҡ әүәләнгән төҫлө тойолдо. Йыр, бейеү, ҡурай, видеоэкран - тәбиғи, бер байрамыбыҙ ҙа уларһыҙ үткәне юҡ, шөкөр. Киләсәктә лә уларҙан айырмаһын Хоҙай. Ләкин был юлы Һүҙ ғәли йәнәптәре -Башҡорт теленә тулыһынса төп ролде тапшырып ҡуйыу ҙа кәрәк булғандыр, бәлки. Һүҙ, туған тел байрамы килеп ингән тамашасыны ишек төбөнән ук сәләмләп, ҡотлап ҡаршы алһа, ә фойела төрлө уйындар, викторина, конкурстар ойошторолһа, тағы ла йәнлерәк булыр ине, тигән теләк белдергән бер тамашасы фекере менән ризалашмай булмай. Икенсе бер тел һөйөүсе киләсәктә был байрамды тамашасылар ҡатнашлығында ҙур Асыҡ дәрес рәүешендә үткәреүҙе кәрәк тип тапты. Мәҫәлән, тип дауам итә ул, байрам серлелеген, яҡшы кәйефте кисәгә саҡырыу ҡағыҙынан уҡ башлап ебәрергә лә мөмкин: мәҡәл, әйтем, йомаҡ, бәйет, шиғыр юлдарының яртыһын - билеттың ярты өлөшөнә, дауамын шул уҡ билеттың икенсе яртыһына яҙаһың, әйҙә, эҙләшеп, табышһын, аралашһын, геү килешһен халыҡ! Байрам бит, Туған телебеҙ байрамы...

**Фәтиха ИШБИРҘИНА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттар ҡышын эҙ буйлап килеп, ҡиммәтле тиреле йәнлектәргә һәм мышыларға ҡоралдан атҡан, шулай уҡ махсус һунарҙар ҙа булған. Шулар араһынан иң ҡыҙыҡлыһы - айыуҙың өңө алдында таҙғаҡ ҡороу. П.С. Палластың һүҙҙәренсә, башҡорттар "төнгөлөккә айыуҙарҙы ағас ботаҡтарында йәки улар көтөүгә һөжүм иткән көтөүлектәр, үләкһә тирәһендә ҡарауыллай". Ысынлап та, Көньяҡ Урал тауҙарында таҙғаҡтарҙы айыу йыҡҡан малдарҙың үләкһәһе тирәһендә ҡорғандар. Бының өсөн бер нисә һайғау ҡырҡып, уларҙы икешәрләп йәки өсәрләп ауыш итеп емтек эргәһендәге ике ағасҡа бәйләп нығытҡандар **(һүрәт)**. Ошо һайғауҙар буйлап таҙғаҡҡа



менгәндәр ҙә инде. Ике ағас араһындағы ағас баҫҡыстарға ике йыуан жирҙә һалынған. Ике жирҙәгә арҡыры һайғауҙар түшәлгән һәм һунарсы шулар өҫтөндә ултырған. Айыуға төнөн, ул емтекте тамаҡлай башлағас, атҡандар. Әгәр ул үлмәй, яраланып, таҙғаҡҡа үрмәләй башлаған осраҡҡа тип һәр һунарсы үҙе менән балта йөрөткән. Тирә-яҡтағы үләнде тапап, һиҙгер айыуҙы емтек эргәһенә килеүҙән өркөтмәҫ өсөн, ҡағиҙә буларак, һунарсылар һунар урынына аттарҙа килгән.

Башҡорттарҙың айыуға һунар иткәндәге икенсе киң таралған ысулы - унының өңөнә һунар итеү. Улар ҡышҡы йоҡоға китер алдынан айыуҙы күҙәткән йәки өҫтөндәге ағастарға ҡунған бәҫ буйынса унының өңөнә осраҡлы ғына юлыҡҡан. Һунар эттәре башҡорттарҙа бик һирәк булған, шунлыҡтан, улар айыуҙы осло һайғау менән төрткөләп уятҡандар һәм йыртҡыс өңөнән сыҡҡан ваҡытта уға айыу һөңгөһө менән сәнскәндәр йәки атҡандар. Айыу һөңгөһөн башҡорттар үҙҙәре эшләгән: уларҙың башағының оҙонлоғо 50 сантиметрға еткән, уны һапҡа ултыртыу өсөн сөй ҡаға торған тишеге лә булған. Айыу һөңгөһөнөң башағы тал япрағы формаһында эшләнгән.

Ҡайһы бер һунар төрөндә башҡорттар һыбай йөрөгән. Бигерәк тә йәнлектәрҙе ҡырпаҡ ҡарҙан баҫтырыу киң таралған. Һыбай баҫтырыу нигеҙҙә Урал аръяғы яландарында, көньяҡта һәм көньяҡ-көнбайышта күҙәтелгән. И.И. Лепехин әйтеүенсә, һунарға башҡорттар хатта ҡаҙаҡ далаларына ла сыҡҡан. Эттәр булмағанда, һыбайлап нигеҙҙә бүреләргә һунар иткәндәр, эттәр булғанда инде - ҡуяндарҙы һәм төлкөләрҙе аулағандар. Беренсе ҡырпаҡ ҡар төшөү менән улар яланға артель менән сығып, эҙҙәр буйынса ҡайҙа ниндәй йәнлек йәшенгәнен асыҡлаған. Эҙләп табып йәки осраҡлы ғына осратып, йәнлекте артабан эҙәрлекләгәндәр. Хәлдән тайған бүрене тере килеш ҡулға төшөргәндәр йәиһә ҡамсы менән моронона һуғып үлтергәндәр.

✓ *Һөҙөмтә көтөлмәгәнсә булды: бар тамашасы аяғүрә баҫып алҡышланылар. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, жюри ағзалары бер тауыштан башҡорт ҡурайына беренсе урын бирҙе!*



ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ ИР-ЕГЕТ

# ХӘРБИЛЕКТӘН ҺУҢ КИЛГӘН...

## әҙиплек һәм иман



**"Киске Өфө"лә "Етмеш һөнәрле ир-егет" тип аталған мәҡәләләр конкурсы иғлан ителгәнен белгәс, "Милли идеяға торош" рубрикаһында Әхмәр Үтәбайҙың үҙенең егетлек һөнәрҙәрен һанап сыҡҡанын уҡығас, мин дә ошо юҫыҡта үҙемдең уй-фекерҙәрем, хәтирәләрем менән бүлешмәксе булдым. Үҙеңдең ҡулыңдан килгән һөнәр-шөғөлдәрең тураһында яҙа башланың икән, теләһәң-теләмәһәң дә, бер аҙ маҡтанырға, Үтәбайса әйткәндә, "баймаҡланырға" тура килә инде, сөнки бер кемдең дә "ғүмер буйы тырышып-тырышып та, минән эш сыҡманы..." тип яҙмаҫы билдәле.**

Бөтә малайҙар кеүек үк, урамда уйнап үҫтем, ҡайһы саҡта ҡанға туҙғансы һуғышып ҡайтҡан мәлдәр ҙа булғыланы. Башҡаларға эйәреп, туп типкеләшһәм дә, минән футболист сыҡманы. Ул ғына ла түгел, насар уйнаған өсөн мине гел генә ҡапҡа һаҡларға ҡуйыуҙарын хәтерләйем. Ни өсөн һүҙемде әллә ни үҙемә килешеп тә етмәгән спорт тирәһенәнерәк башланым, тиһегеҙме? Йүгереү, һикереү кеүек һөнәрҙәрҙе үҙләштерә алмаһам да, шаҡтай иртә йөҙөргә өйрәндем. Һәүетемсә оҫта ғына, оҙаҡ итеп, арымайынса йөҙә инем. Тап ана шул йөҙөү менән бәйләнгән (оло шатлыҡлы, тип тә әйтер инем) бер ваҡиға хәтергә уйылып ҡалған. Миңә 11-12 йәштәр самаһы булғандыр. Үҙемдән дүрт йәшкә оло булған (15-16 йәштәрҙәге, еткән ҡыҙ тип әйтерлек!) Сәғиҙә исемле апайҙы тәрән һыуҙа батып барған еренән ҡотҡарып алып сыҡтым. Үҙемдең нескә генә "малайҙарский" ҡулым менән уның ярайһы тос ҡулынан тотҡанмын, икенсеһе менән ишәм. Беләктәргә әле егеттәргә хас "ит әҫәре" лә ҡуна башламаған. Был осраҡта йә мин уны һөйрәп сығарам, йә иһә был дәү кәүҙәле апай мине үҙе менән бергә һыу төбөнә һөйрәп алып төшөп китә. Өсөнсө юлы юҡ! Сөнки ул да минең ҡулға сат йәбешкән һәм ысҡындырыу тураһында, әлбиттә, уйламай ҙа ине. Көс-хәл менән ярға сыҡҡас та дер ҡалтыранған Сәғиҙә апайҙың ҡулынан тағы ла күпмелер ваҡыт ысҡына алмай торғаным һаман күҙ алдында... Ә шулай ҙа йөҙөү һөнәре минең артабанғы донъя көтә торған төп кәсебемә әйләнмәне, әлбиттә.

Әммә, тап ана шул осорҙараҡ булған тағы бер ваҡиға ниндәйҙер кимәлдә киләсәкке тормошомдоң бәләкәй генә бер үсентеһе булғандыр, тигән уйым бар. Мәктәптә дүртенсе синыфта уҡыған саҡта булды был хәл. Минән өс йәшкә олораҡ ағайымды класы менән совхоз тоғына иген таратырғамы, өйөргәме алып барғандар. Уҡыусы балалар, шаярып, иген менән сәпләшә торғас, ағайымдың ҡолағына бойҙай бөртөгө инә. Өйҙә соҡоп сығара алмағас, бер-ике көндән ауыл амбулаторияһына табибҡа барып йыуҙырыу ҙа һөҙөмтә бирмәй. Дүртенсе-бишенсе көндәрҙә район дауаханаһында ла, әлеге бойҙай бөртөгөн сайҙыртып та, башҡа инструмент менән дә ала алмай, ағайымдың ҡолағын ҡанатып бөтәләр. "Ярар, бар, өйөңә ҡайт. Үҙе сереп, бер ҡасан төшөр әле", тип ҡайтарып ебәрәләр. Ағайым ҡолағы әрнеүенә түҙмәй илай, температураһы күтәрелә башланы. Мин уны йәлләп, "Ҡана, ағай, ҡарайым әле", тигән булам. Ҡараһам, һыу менән күп йыуҙырыуҙарғалыр, бүртеп, байтаҡ ҙурая төшкән бойҙай орлого бик төптә, ҡолаҡ ҡыуышлығының тарайған урынында бер аҙ ғына күренеп тора. Ингән урынынан нисектер кире сығырға тейеш бит инде ул, тигән уй өйкәй күнелдә. Үҙемдең уйынсыҡтар араһынан еҙ тамыр сыбыҡ кисәге табып алдым да, бер осон бик-бик бәләкәс итеп ҡыпһыуыр менән бөгөп, үҙемсә бәләкәс кенә ырғаҡ яһаным (осо 1 мм ғына самаһы). "Ағай, ҡана алып ҡарайым", тигән булдым. Риза булды. Башҡаса сара юҡ, тип уйлағандыр инде. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, әммә бер ярты минуттан шешенеп, бүртенеп торған бойҙай бөртөгө ҡулымда ине! Шатлығыбыҙҙың иге-сиге булманы. Айырыуса әсәйем ныҡ һөйөндө. Һуңынан, тиҫтәләгән йылдарҙан һуң, ошондай шөғөл үҙемдең төп һөнәремә әйләнерен, әлбиттә, белмәй инем. Киләсәктә, юғары категориялы отоларинголог булараҡ, күп балаларҙың ҡолаҡ, танау ҡыуышлығынан, йотҡолоғонан һәр төрлө шундай ваҡ-төйәк әйберҙәрҙе алаҫаҡмын әле мин. Борсаҡ, мәрйен, аҡса, һөйәк, хатта офицер погондарындағы йондоҙсоҡтарға ҡәҙәр...

Тик бала сағымдағы хыялым - тик хәрби кеше булыу ине. Өлкән ағайым, хәрби кеше булараҡ, йыл да отпускыһына форма кейеп ҡайта торғайны. Әллә шуға ҡыҙыҡылды, әллә ни... Уның күҙҙең яуын алырҙай йылтырап торған кокардалы фуражкаһын кейеп, алтын ялатылған погондарын мәктәп формаһының иңдәренә һалып, көҙгө алдынан китешмәгән саҡтарым һаман да күҙ алдымда. Ҡасан үҫеп етермен инде, тигән шундай уйҙар, әлбиттә, һәр кемдә лә була торғандыр инде...

Мәктәпте тамамлар алдынан, хәрби училищеға барам, тигәнде ишеткәс тә, әсәйем мәрхүмә һыҡтап-һыҡтап иланы. "Ағайың ғүмер буйы үәйәннейҙә. Уны, бәлки, көтөп ала алырмын. Һин дә егерме биш йылға китергә уйлайһыңмы? Һин ҡайтҡансы йәшәй алмаҫмын бит..." тигән һүҙҙәре әле лә булһа хәтеремдә. Улай булғас, медицина институтына барырға ҡала инде, мәйтәм. Барҙым. Индем. Уҡыным. Әммә дүрт курсты тамамлар алдынан Хәрби медицина академияһынан офицерҙар килеп, ир-егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә ҡоҙалай башлағас, күңелемдә ваҡытлыса йоҡомһорап торған хыялым өрҙөнынан, башҡаса йоҡламаҫлыҡ булып уянды. Барам! Шулай тип ҡарар ҡылдым. Барҙым. Йәш табибтар, айырыуса егеттәр ул саҡта (хәҙер нисегерәктер, белмәйем) хирург булыу теләге менән яна ине. Ана шул романтика мине, йәш медицина лейтенантын, хеҙмәтемдең башында Мәскәү ҡалаһына уҡырға алып килде. Интернатурала йылға яҡын уҡып, хәрби-ялан хирург һөнәренә эйә булып ҡайттым. Хәрби госпиталдең хирургия бүлеге ординаторы вазифаһына тәғәйенләндем. Дүрт йылдан һуң (әрмегә килеүен килгәс, үҫәһе лә килә, ауыҙыңа май булғыры) подполковник дәрәжәһенә һис тоҡарлыҡһыҙ барып етерлек эш урыны бушаны һәм миңә шунда отоларингология бүлеге начальнигы булырға тәҡдим иттеләр. Өлкән лейтенант дәрәжәһендә шундай ҙур вазифаны башҡарыуы ҡатмарлыраҡ һымаҡ күренһә лә риза булдым. Әлеге "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", тигәндәй, йәнә киттем Мәскәү ҡалаларына. Тағы бер йылға яҡын уҡып, баяғы юғарыла әйтелгән вазифаға эшкә ҡайттым. Артабан сираттағы һәр уҡыуҙа ЛОР хирургияһы буйынса байтаҡ ҡына операцияларҙы үҙләштереп, практикала уңышлы ҡулландым. Операция әүҙемлеге буйынса, Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре (РВСН) госпиталдәре араһында икенсе урынға сыҡтым (беренсе урында минән байтаҡ йәшкә олораҡ, әйткәндәй, яҡташыбыҙ Ишембай егете подполковник Шамил Ғөбәйҙуллин ине).Подполковник дәрәжәһенә бер көнгә лә һуңламай, ваҡытында барып та еттем, әлхәмдүлиллаһ.

Советтар Союзы тере ине әле. Халыҡтар дуҫлығы, тигән төшөнсә ысынбарлыҡта ине. Гарнизонда "Халыҡ ижады конкурсы" иғлан ителгәс, һәр саҡ өйөмдә булған ҡурайымды алып, мәҙәниәт йортона килдем. Рус, украин, молдаван, белорус һәм башҡа күп милләттәрҙең концерт программаһына мине лә индерҙеләр. Был офицерҙар йортонда ҡурай ошоғаса бер ҡасан да яңғырамаған икән. Бик күптәрҙең, хатта мәҙәниәт вәкилдәренең дә ҡурай моңон бер ҡасан да ишетмәгәндәре байтаҡ ине. Шуның өсөн дә мин тәүҙә бер аҙ уйлана төштөм, "бәлки, уйнап маташмаҫҡалыр, бәлки, ҡурай моңон бер кем дә аңламаҫ?" Ышаныслыраҡ булһын өсөн Роберт исемле яҡташ майорҙы миңә баянда ҡушылып уйнарға күндерҙем. Конкурс концертында был сәхнәлә беренсе мәртәбә башҡорт халыҡ көйө "Урал" һәм бер-нисә бейеү көйө яңғыраны. Һөҙөмтә көтөлмәгәнсә булды: бар тамашасы аяғүрә баҫып алҡышланылар. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, жюри ағзалары бер тауыштан башҡорт ҡурайына беренсе урын бирҙе! "Ғүмеремдә тәүге тапҡыр ишетәм бындай музыка тауышын, - тине украин милләтенән булған бер олораҡ ҡына подполковник һуңынан яныма килеп. - Икһеҙ-сикһеҙ далалар, шунда иректә йәшәгән, аттарҙа сапҡан кешеләр күҙ алдына килә..."

Хеҙмәтемдең срогы тулып килгән саҡ. Миңә ҡырҡ дүрт йәш. Өлкән улым Салауат урыҫ телендә бер ҙур ғына хикәйә яҙған да, башҡортсаға тәржемә итеп, берәй башҡорт гәзитенә ебәреүҙе үтенде (хәрби ҡаласыҡта урыҫтар араһында тыуып үҫкән балаға, әлбиттә, мин тулы башҡортса белемде бирә алманым. Яҡшы һөйләшһә лә, башҡортса дөрөҫ итеп яҙа белеп үк бөтмәй). Шул хикәйәне тәржемә итеп ултырған саҡта минең башҡа көтмәгәндә бер уй килде. Нишләп миңә туған телемдә ошондай хикәйәләр яҙмаҫҡа?.. Башҡа килеү генә түгел, был уй тора-бара көслө теләккә әүерелде. Сөнки ҡасандыр, мәктәп йылдарында, башҡорт телендә үҙебеҙҙең башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен ифрат та яратып уҡый инем. Хәрби ҡаласыҡта йәшәһәм дә, "Ағиҙел", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдарын алдырып уҡый торғайным. Туған әҙәбиәткә ҡарата булған һөйөү һүрелмәй, күңелдә йәшәп килгәндер, күрәһең. Һәм бер саҡ йәйлап ултырып, үҙемдең иң тәүге әҫәрем - "Тау тотҡоно" исемле повесымды яҙҙым. Өфөгә командировкаға бер килгәнемдә Әмир ағай Әминовҡа ҡулъяҙмамды уҡырға бирҙем. Тиҙ генә уҡыны. Повесыма юл бирҙе, рәхмәт яуғыры! Әҫәр Әхмәр Үтәбай тарафынан мөхәррирләнеп, "Шоңҡар" журналында баҫылып сыҡты. Танылған әҙиптәрҙең мине шулай йылы ҡаршы алыуҙарынан да дәртләнептер, бер-бер артлы яҙып алдым да киттем. Ошо йылдар эсендә гәзит-журналдарҙа байтаҡ әҫәрҙәрем донъя күрҙе. Яҙыша башлағандан алып күп кенә яҙыусылар, журналистар менән таныштым. Ошо ижад кешеләрен яҡшы итеп яҙыу һәләте менән бер рәттән, әҙәм балаһы өсөн иң мөһим булған кешелеклек сифаты берләштерә икән, тигән һығымтаға килдем. Сөнки редакцияларға ҡасан ғына килеп инеүеңә ҡарамаҫтан, был кешеләр менән бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшкәс тә, оло ҡәнәғәтлек кисереп, үҙеңдең Кеше икәнеңде тағы бер мәртәбә тояһың. Уларҙан тулы күңел, яҡшы кәйеф менән ҡайтып китәһең. Сөнки уларға эрелек, тәкәбберлек тигән нәмәләр хас түгел. Улар кешегә иң кәрәкле, шул уҡ ваҡытта иң ябай йылмайыу, кеселеклелек тип аталған үтә лә ҡиммәтле нәмәне бүләк итеү һәләтенә эйә. Бер атаәсәнең төрлө холоҡло, әммә бик тә әҙәпле, татыу балалары һымаҡ күрәм мин ошо ижад кешеләрен. Ошо "етмешенсе" төр һөнәремде үҙләштереү эшендә Әмир ағай Әминевты, Сабир ағай Шәриповты, Хәйҙәр ағай Тапаҡовты һәм Әхмәр Үтәбайҙы үҙемдең уҡытыусыларым тип әйтһәм дә артыҡ булмаҫ.

Һөнәремдең "етмеш беренсеһе"н һөнәр тип атамайым, әстәғфируллаһ. Сөнки, дин тотоу, намаҙға тороу, ғәрәп яҙыуындағы изге Ҡөрьәнде уҡый белеү, яҡындарыңды ислам диненә өндәп, дәғәүәттәр яһау - һәр мосолман кешеһенең Аллаһ Собхәнә үә Тәғәлә ҡушҡан изге бурысы. Әле хеҙмәт итеп йөрөгән мәл. Ғәрәп яҙыуын, һәр төрлө хәҙистәрҙе, намаҙ тәртиптәрен үҙаллы өйрәнеп, сираттағы ялдарымдың береһенә ҡайтҡанда, Сибай "Тәҡүә" мәсете имам-мөхтәсибе Әғләмитдин хәҙрәткә ислам дине йолалары, ғәрәп уҡыуы буйынса "экстерн" рәүештә имтихан бирҙем һәм имам танытмаһы алып киттем. Сөнки мин хеҙмәт иткән гарнизонда мосолман кешеләре байтаҡ булыуына ҡарамаҫтан, муллалар юҡ ине. Йыназалар уҡырға ла тура килде. Авар, татар, ҡаҙаҡ, башҡорт офицерҙарының балаларына исем дә ҡушҡыланым. Йыш ҡына Ҡөрьән аяттары уҡыу мәжлесенә саҡыра торғайнылар. Бәлки, шуны күреп үҫкәнгәләр, улдарым Салауат менән Азат бер нисә йыл элек дин тота башланы, намаҙға баҫтылар. Икеһе лә Сәғүд Ғәрәбстанына барып, Мәккә ҡалаһында хаж ғәмәлдәрен ҡылып, ислам диненең бишенсе фарыз ғәмәлен үтәп ҡайттылар. Әлхәмдулиллаһ. Ислам динендә ғорурланыу, ниндәйҙер мәғәнәһендә яраған эш түгел. Әммә, Аллаһы Тәғәлә шатлығым менән бүлешеүемде килешмәгән ғорурлыҡ йә иһә маҡтаныу тип ҡабул итмәҫ, тигән өмөтөм бар.

Мәҡәләмдең башында килтерелгән мәҙәктәге хәрби кеше һымаҡ, разрешите представиться: Сибай яҙыусылар ойошмаһы ағзаһы, юғары категориялы табиб, отставкалағы медицина подполковнигы

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*АТАЙ ҺҮҘЕ*

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - педагогия фәндәре кандидаты, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының кафедра мөдире, өс ул атаһы Булат Хәләф улы ЮНЫСБАЕВ. Уның менән ғаиләлә ир-егеттәр тәрбиәләү традициялары тураһында һөйләштек. Уның "Ир балаларҙы әрләргә ярамай", тигән фекере, моғайын, һеҙҙе лә уйланырға мәжбүр итер. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**

# ИР БАЛАНЫҢ...

## әйткән һүҙе бер булһын!



### Егет бит ул!

Ҡатыным менән өс ул үҫтерҙек. Улдарыбыҙ өсөһө лә был тормошта үҙ юлын тапты, тип, ауыҙ тултырып әйтә алам. Өлкән улыбыҙ Урал һәм кинйәбеҙ Баязит икеһе лә хеҙмәт юлын фәнгә бәйләне, ә уртансыбыҙ Азамат иһә, үҙ эшен асып, бынамын тигән эшҡыуар булып китте. Атай кеше өсөн үҙ юлын дауам итерҙәй улдар үҫтереп, уларҙың ир ҡорона етеүен күреүҙән дә ҙурыраҡ бәхет юҡтыр, минеңсә. Һәр хәлдә, үҙемдең был тормоштағы хыялдарымдың иң мөһим бернисәүһен ысынбарлыҡҡа әйләндерә алыуым да ҙур ҡәнәғәтлек хисе тыуҙыра. Һәр ағас йәшәү көсөн тамырҙарынан һәм ҡояш нурҙарынан алған кеүек, беҙҙең балалар ҙа тәрән тамырлы халҡыбыҙ традициялары буйынса тәрбиәләнеп, ҡояш нурылай шифалы башҡорт мөхитендә буй еткерҙеләр. Улар күңеленә телгә, илгә һәм хеҙмәткә һөйөү, аң-белемгә ынтылыш сифаттарын һеңдерергә ынтылдыҡ. Улдарыбыҙға биргән тәрбиәнең "үҙәк тамыры" атайымдан киләләр, тип уйлайым. Ә атай иһә, бер ваҡытта ла нотоҡ уҡып ултырманы, әрләмәне лә. Хатта, берәй ир бала үҙен яҡшы яҡтан күрһәтһә, "Ул бит егет кеше!" тип, малай-шалайҙы ҡотортоп, маҡтап ебәрә торған изге күңелле, кеселекле кеше ине. Тағы ла, һүҙгә ныҡ иғтибарлы, ике тапҡыр һөйләмәй, бер әйткән һүҙенән тайпылмай, әйтһә, мотлаҡ эшләй торған холоҡло инсан ине атайым. Был ғәҙәте менән дә ул беҙгә, балаларына, ысын ир ниндәй булырға тейеш икәнлеген һеңдергәндер.

### "Аҡтар"ҙан ҡотолған малай

Атайымдың йәш сағындағы бер хәтирәһен һөйләп ишеттергә килә. Уға Граждандар һуғышын да, Бөйөк Ватан һуғышын да күрергә тура килгән. Граждандар һуғышында уны, бәләкәй генә малайҙы, бер төркөм казактар "Күрше ауылға тиклем беҙҙең малды ҡыуышһаң, кәнфит бирербеҙ", тип әүрәтеп, үҙҙәре менән алған. Сигенеп барыуы икән тегеләрҙең. Баралар-баралар, атайҙы һис кенә лә яндарынан ебәрмәйҙәр, ти казактар. Ә малайҙың, йәғни, бәләкәй Хәләфтең ҡайтҡыһы килә. Аҡтар менән Ҡаҙағстан далаларына тиклем барып етә яҙған был. Ошо төркөмдә атайҙың бер ауылдашы (иҫеме билдәһеҙ) ла булған, ул атайыма шыбырҙап ҡына үҙенең быйан ҡасыу планы барлығы тураһында әйткән. Шул төндә атай, бәләкәй булғанға күрә ҡарауылда бер ниндәй шик тыуҙырмауынан файҙаланып, алдан уҡ теге ағай тарафынан әҙерләп ҡуйылған аттар араһына инеп китеп, бер атҡа атланып, тағы өсәүһен үҙе атланған атына бәйләп, дүрт ат менән тороп саба.

- Аҡтар эштең ниҙә икәнен һиҙеп ҡалғас та ҡыуа төштөләр, әммә уныш беҙгә йылмайҙы - мин теге ағайҙы йылға буйынан барып таптым һәм беҙ икәүләп дүрт ат эйәртеп, ҡасып ҡотолдоҡ, - тип һөйләгәйне атай йылдар үткәс.

### Мәғлүмәтлелек һәм күп теллелек - бөгөнгө төп ҡорал

Улдарыбыҙ бәләкәй саҡта кистәрен әкиәттәр һөйләүҙе ғәҙәткә индерҙек. Был ғәҙәт, бөгөн килеп, ыңғай һөҙөмтәләрен бирҙе. Ни өсөн тигәндә, балалар шул әкиәттәрҙәге батырҙарҙың тырышлыҡ, изге күңеллелек кеүек сифаттарын күңеленә һеңдереп үҫте. "Батырҙарҙың ҡылыс, уҡ, һөңгө, ҡамсы менән ҡоралланыуына инде быуат-быуат ваҡыт үткән. Бөгөнгө батырҙар өсөн был ҡоралдар кәрәкмәй, сөнки улар тағы ла хәтәрерәк дошмандарға ҡаршы көрәшә. Әммә был көрәштә уларға ҡорал-яраҡтар ғына етмәй, улар был көрәштә үҙҙәренең аҡылына, зирәклегенә һәм күпте белеүенә таянырға бурыслы. Бөгөнгө батыр - ул мәғлүмәтле кеше. Ә төп ҡорал - компьютер", тип, әкиәт һуңынан теге йәки был һорауҙы аңлатып та ҡуя инем мин. Улдарым компьютер менән еңел эш итә һәм был, минеңсә, уларҙың унышҡа, абруйға өлгәшеүенә ярҙам итеүсе бер ҡорал.

Икенсе ҙур ҡорал - ир кешенең күп телдәр белеүе. Ир кеше донъя гиҙергә тейеш, ә быныһ өсөн сит телдәрҙе белеү мотлаҡ. Балаларыбыҙ иң әүәл тыуған телен белһен, тип тырыштыҡ. Шуныһы яҡшы: беҙҙең әйткән һүҙҙе балалар үҙҙәре лә ҡанун итеп ҡабул итте. Шуға күрә, беҙ бөгөн дә бергә йыйылһаҡ, тик башҡортса ғына аралашабыҙ. Рус телен белеү зарурлығы ла бер ниндәй бәхәс тыуҙырмай, сөнки Рәсәй кешеһе үҙ тыуған теленән тыш, рус телен дә һыу кеүек эсергә тейеш. Өсөнсө иң мөһим тел - инглиз теле. Аллаға шөкөр, балалар бөтәһе лә инглиз телен һәйбәт белә, мәҫәлән, "Scince" фәнни журналына яҙышыусы Баязит улым мәҡәләләрен тура ошо телдә яҙа, донъяның төрлө тарафтарынан ғалимдар менән дә еңел аралаша. Әйткәндәй, ул өс йыл инде сит илдә - Эстонияның Тарту ҡалаһында фәнни эшмәкәрлек менән шөғөлләнә. Европалағы иң боронғо уҡыу йорттарының береһе булған халыҡ-ара генетик тикшеренеүҙәр үҙәгендә эшләй. ДНК анализдарынан сығып, милләттең тарихи мәғлүмәттәрен асыҡлай, милләттәрҙең барлыҡ килеү тарихын өйрәнә.

### Ағай кешегә иҫеме менән өндәшмәйҙәр

Ир заты күпселекте тәшкил иткән ғаиләләрҙә, атай кешенән ҡала, ағай абруйы өҫтә килә. Быны, тәү сиратта, ата-әсә контролдә тоторға бурыслы. Ҡустылар кеше иң өлкән ағайҙың әйткәне лә, атайҙыҡынан ҡала, закон булырға тейеш. Өлкән ағай өйҙә түгел икән, уның вакант дәрәжәһе, автоматик рәүештә, кесерәк ағайға күсә. Күп кенә ғаиләләрҙә ағай кешегә саф башҡортса "ағай" тип өндәшеү урынына, иҫеме менән өндәшәләр. Был күренеш, һис шикһеҙ, ғаиләләге гармонияны ҡаҡшатмай ҡалмай. Минең өлкән улымды, Уралды, ҡустылары бер ваҡытта ла иҫеме менән атай алмай. Уртансыһы менән кесеһенең йәш айырмаһы ни бары бер йыл ғына булһа ла, был закон уларға ла ҡағыла. Бына был өлгөнө мин яҡшылар иҫәбенә ҡуйыр инем.

### Ир баланы тыйһаң...

Ир баланы бәләкәйҙән ҡағып-һуғып тәрбиәләһәң, самаһыҙ әрләп торһаң, ул ҡурҡаҡ, өркәк булып, үҙ-үҙенә йомолоп үҫә. Ә ҡыҙ бала, барыбер, тәбиғәте менән әрһеҙерәк, һәм уны самаһын белеп тыйырға була әле. "Ҡыҙ баланы ҡырҡ ерҙән тый", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер. Өләсәйемдең, мәҫәлән, "ир балаға һүҙ әйтмәгеҙ, кейәңкеләр", тип, сая, үсаллыраҡ ҡыҙҙарҙы әрләп ултырғаны хәтерҙә. Көслө зат һаналһа ла, ир затының психологияһы ҡатын-ҡыҙ психологияһына ҡарағанда нескәрәк булыуын боронғолар ҙа яҡшы белгән, тимәк. Ир балалар, тыштан ныҡ һымаҡ күренһәләр ҙә, эстән тиҙерәк "һыныусандар". Ни өсөн бөгөн күп егеттәр йыуаш? Сөнки бәләкәйҙән ҡағылып-һуғылып, психикаһына емергес тәьсир иткән факторҙарға ҡаршы тора алмай үҫә улар. Мин улдарымды әрләмәй торғайным. Хәҙер улар, ирмен, тип күкрәк һуҡмаһалар ҙа, көслө зат булараҡ, тормошта үҙ позицияларын ныҡлы билдәләгәндәр. Ир икән, ул кешенең иң беренсе сиратта ғаиләһе, унан ары йән дуҫтары булһын. Ир бит торомтай түгел. Күптәр тота ла заман ауырлығына һылтана. Дөрөҫ әйтәләр, заман бер ваҡытта ла еңел булмаған, элек, бәлки, тағы ла ауырыраҡ булғандыр. Ир кеше аҡылы менән дә, эше менән дә ҡатынынан бер башҡа юғарыраҡ торорға тейеш. Был ҡатын кешенең кәм йә аҡылһыҙ булыуын аңлатмай. Ни тиһәң дә, күп ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә тәү сиратта аҡылынан сығып баһа биреүсән. Шулай ҙа бөгөн ир кешенең матди яҡтан етеш булыуы ла мотлаҡ. Ир булғас, аҡса ла таба белергә тейеш ул. Был йәһәттән минең малайҙар күптәргә өлгө булырлыҡ. Үҙҙәренең эше лә, шәхси предприятиелары ла бар. Өсөһө лә фатирлы. Ир кеше мотлаҡ йорт һалырға тейеш. Ҡайһы берәүҙәр ғүмер буйы дөйөм ятаҡтарҙа йәшәп, ҡартатай булып бөтә. Ир кешенең үнәрһеҙлеге, тип һанайым мин быны. Хөкүмәттән ғүмер буйы нимәләр көтөп-көтөп, ғүмерең дә үтеп китеүе бар. Тырышҡан кеше ерен дә таба, өйөн дә һала.

### Бүрегә мылтыҡһыҙ йөрөүселәр

Ҡыш етһә, беҙҙең яҡтарҙа бүрегә һунарға йөрөй торғайнылар. Беҙҙең атай ҙа бүре һуғырға йөрөргә яратты. Спорт һымаҡ ҡабул ителә ине был шөғөл. Уйындың яҙылмаған ҡағиҙәләре буйынса, йыртҡысты утлы ҡорал ярҙамында аңһат ҡына атып алырға ярамай. Бүрене көнө буйы көрт буйлап ҡыуаһың һәм, ат менән көрт ярып яҡынлап, башына һуйыл менән һуғаһың. Был һөнәрҙе мин дә атайҙан өйрәндем, ҡустым менән беҙ ҙә бүре һуғырға йөрөй торғайныҡ. Күҙ алдына килтерһәң, уҙған быуатта ғына булған хәлде әкиәт тип уйларлыҡ. Шулай итеп, ысын ирҙәр шөғөлө булып торҙо борон һыбай килеш бүре ҡыуыу. Ҡурҡаҡтар бүрегә түгел, ҡуянға ғына йөрөй. Минең малайҙар атта саба беләләр. Атта йөрөй белгән малай, "матай"ҙа йөрөй белгән малайға ҡарағанда, үҙен ғорурыраҡ, батырыраҡ, ҙурыраҡ итеп тоя.

Әйткәндәй, атай мәрхүмдең һәйбәт аттары булды, уның йылҡы үрсетеү эшен хәҙер ҡустым дауам итә. Малайҙар бәләкәй саҡтарынан ҡустымдың йәйләүендә йәй үткәрә. Һыҙырып бесән сабып, эйәрһеҙ-ниһеҙ ат менеп, ысын ауыл малайҙарынан ҡалышмай торғайнылар бәләкәй саҡтарында. Әле Урал улымдың эйәр-өпсөнлә аты ла бар. Тимәк, бала сағындағы ҡыҙыҡһыныуы ҙурайғас та юғалмаған. "Ир кешенең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр". Уның бәләкәй улы, дүрт йәшлек ейәнем дә, ауылға ҡайтһа, ыжламай ҙа гел ат араһында йөрөй. Малдар ҙа уның ҡурҡмауын һиҙә шикелле, теймәйҙәр. Бүрегә һунар итеү өсөн бүренән генә түгел, ә аттан да ҡурҡмаҫҡа кәрәк. Минең ейәнемдең бәләкәй генә сағынан уҡ аттан ҡурҡмауын иҫәпкә алғанда, ҙурайғас, унан да бик шәп бүре ҡыуыусы сығыр әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ир баланы ысын ир итеп тәрбиәләү яҡлы кешеләр бер ваҡытта ла яңылышмай. Ир - көслө лә, аҡыллы ла, сабыр ҙа, шул уҡ ваҡытта, кәрәк саҡта ҡыҙыу ҙа булырға мөмкин. Әммә, иң мөһиме, ул атай булараҡ та тәрбиәүи эшен дөрөҫ ойоштороһон, бөгөнгө ҡунағыбыҙ Булат Хәләф улы Юнысбаев һымаҡ.**

***✓ Тарих фәндәре кандидаты М. Шкадаревич үҙенең Днепропетровск ҡалаһында ошо фамилиялы бер кешене лә осратмауын хәбәр итә. "Матросов" фамилияһы, бәлки, уйлап ҡына сығарылғандыр, тигән фекер белдерә ул.***



**Ул саҡта беҙ Рәүеф ағай Насиров менән "Башҡортостан" гәзитендә бергә эшләй инек. Рәүеф Хәй улы беҙгә, йәш журналистарға, һөнәребеҙ өсөн иң мөһим сифаттар -ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, эҙәрмәнлек, рухлылыҡ, белемлелек, илһөйәрлек, яуаплылыҡ өлгөһө булды. Күренекле мәғрифәтсе һәм дин әһеле Зәйнулла Рәсүлев тураһында иң тәүҙә унан ишеттек, Шәриф Манатов, Әбделҡадир Инан, тағы әллә күпме башҡорттоң тарихи шәхестәре менән беҙҙе лә, гәзит уҡыусыларыбыҙҙы ла Рәүеф ағайҙың төпсөрлө һәм тәфсирле ҡулъяҙмалары таныштырҙы. Яуаплылыҡ өлгөһө булды, тигәнемде раҫлап, шуны ла әйтәм: Рәүеф Хәй улы үҙе яҙасаҡ мәҡәләләге һәр фактҡа, бәләкәй генә ваҡиға, хәл-күренешкә, ишеткән хәбәргә үтә иғтибарлы булды, уны ҡырҡ ҡат иләктән үткәрҙе. Был сифатына бигерәк тә "Ҡайҙан һин, Матросов?" тигән яҙмалары өҫтөндә эшләгәндә шаһит булынды. Учалы районында Александр Матросовтың Ҡунаҡбай ауылы егете Шакирйән Мөхәмәтйәнов булыуы тураһындағы хәбәрҙе бик күптән һөйләгән булалар. Был хәбәрҙе ишеткәненән һуң Рәүеф ағай арыу ғына ваҡыт эҙләнеүҙәр алып бара, ҡайһы бер дәлилдәр, иҫбатлауҙар тапҡас ҡына ул хаҡтағы мәғлүмәттәрҙе ҡағыҙға төшөрә башлай. Ул осорҙа "Башҡортостан" гәзитендә эшләүсе һәр журналист, һәр хеҙмәткәр Рәүеф ағайҙың был яҙмаларының нисек яҙылыуына, эҙләнеүҙәренә, материал артынан илебеҙҙең төрлө ҡалаларына командировкаларға юлланыуына, төрлө кешеләр менән хат алышыуына, шул материалдарҙы аҡ ҡағыҙға теркәүенә шаһит булды, әҫәрҙең һәр битен көтөп алып уҡыны. "Ҡайҙан һин, Матросов?" документаль повесын уҡымағандар барҙыр, шуға ла, Матросов-Мөхәмәтйәновтың батырлығына 70 йыл тулыуҙы билдәләгән көндәрҙә гәзитебеҙҙә ошо әҫәрҙән өҙөктәр тәҡдим итмәксе булдыҡ.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**




## Ауыл Советы рәйесе һорау ҡуя

Бер ғәжәп хәбәр ине был. Өфө урамдарының береһендә һис көтмәгәндә миңә Дауыт Һиҙиәтов осраны. Күптәнге таныш. Элек Учалы районы үҙәгендәге колхозда партком секретары ине, хәҙер Ҡунаҡбайҙа ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй. Депутат мәшәҡәттәре буйынса сабып йөрөгәнгә оҡшай: ҡултыҡ аҫтына көрән папка ҡыҫтырған, ҙур ялбыр бүрке ҡырын төшкән. Йөҙгә-йөҙ тиерлек килеп бәрелгәс, ахырыһы, ҡабаланһа ла, туҡтап:

- Шунан, берәй ергә яҙып ҡарамаһыңмы?- тип һорап ҡуйҙы.

- Нимәне?- Мин аңламаным.

- Һуң... Үткәндә әйткәйнем дә инде...- Рәйестең ирендәре һәленде. Кәйефе ҡырылды. Туҡта, үпкәләрлек нимә әйткәйне һуң әле ул? Шунда келт итеп иҫкә төштө: бер мәл беҙ уның менән эс бошорғос оҙон юлды бергә үткәйнек.

...Поезд, төн пәрҙәһен йыртып, ҡыҫ һәм һыуыҡ тауҙар яғына елә лә елә. Вагон тәҙрәләрендә Иглин районы, унан Силәбе өлкәһе ауылдарының уттары емелдәп килде-килде лә, аҙаҡтан бөтә лампалар ҙа һүнде. Коридорҙан үтеүселәр ҙә бөттө. Тик тәгәрмәстәр генә "туҡ та туҡ" килде. Ә беҙ, төн убырҙары, тәҙрә яңаҡтарына һөйәлеп алғанбыҙ ҙа һаман фәлсәфә һатабыҙ. Ни хаҡында ине һуң был әңгәмә?

Һиҙиәтовты бик телсәр кеше, тип белмәйем мин. Һәр хәлдә, туранан-тура уның эшенә бәйле булмаған хәбәрҙе туғып ултырғанын ишеткән юҡ. Етди кеше. Әммә был юлы, ғәжәпкә ҡаршы, ҡыҙып-ҡыҙып, хистәргә бирелде. Ул Советтар Союзы Геройы Александр Матросовты әле үҙе ереккән Ҡунаҡбай ауылында тыуған тип иҫбатлай һәм, шуға күрә, был мәсьәлә менән ныҡлап ҡыҙыҡһынырға кәрәк, тип өгөтләй ине. Өгөтләй генәме, талап итә, журналистарҙы ғәмһеҙлектә ғәйепләй.

- Туҡта-туҡта, ҡыҙма әле... Нисек, Александр Матросов Учалы районында, хатта Ҡунаҡбайҙа тыуған, тимәксеһеңме?.. Ҡуй, көлдөрмә улай.

Һиҙиәтов һүҙен тағы ҡабатланы. Юҡ, ул шаяртмай ине. Шулай ҙа мин, ҡул һелтәп, урынымдан ҡуҙғалдым. Ә ул асыуланды.

- Был мәғәнәһеҙлек тә һуң, Дауыт Мөхәррәмович!

- Ана шул-шул. Дөрөҫ әйттең. Тик ул мәғәнәһеҙлек беҙҙә түгел, ә китаптарҙа!- тине рәйес биттәренә ҡыҙыллыҡ йүгертеп.- Ышанмаһаң, нимә яҙғандарын үҙең уҡып ҡара.

- Уҡығаныбыҙ бар инде.

... Бына нимә хәтергә төштө, ниһәйәт. Һиҙиәтов тағы ниндәйҙер хаттар барлығын һөйләгәйне шикелле теге ваҡыт. Шуға күрә:

- Ә! Теге ниҙе әйтәһеңме?- тигән булдым.- Беләһеңме, бер ҙә форсат теймәне шул.

Һуңғыһы - аҡланырға тырышыу ине, әлбиттә. Шулай ҙа уңайһыҙыраҡ булып китте: кеше, һиңә күңел төбәп, бөтә ихласлығын һалып, үтенесен еткергән, ә һин быға төкөрөп кенә ҡарағанһың. Күпме ваҡыт үтеп киткән бит әле: бер йылға яҡын! Беҙ был осрашыуҙан һис тә ҡәнәғәт булмайынса айырылыштыҡ. Бынан һуң да әллә нисә ай үтеп китте -үҙенде битәрләүе һәм ошолай үҙеңдән яуаплылыҡ төшөрөүе анһат ул. Ләкин ваҡыт тигән нәмә лә, ысынлап та, тар ине. Отпуск алып, донъя мәшәҡәттәренән саҡ ҡына тын алырға форсат тыуғас та, башҡа килтереп һуҡты: туҡта, ни һөйләй ине әле был Һиҙиәтов? Һәм мин А. Матросов хаҡында нимәләр яҙылған, барыһын да ҡарап сығырға булдым. Һуш китерлек бер ни юҡ һымаҡ. Барыһы ла күптән, ҡабатлау таблицаһы төҫлө таныш: Украина ССР-ының Днепропетровск ҡалаһында тыуған. Бәләкәй сағында уҡ үкһеҙ етем ҡалған. Ульяновск өлкәһенең Ивановка балалар йортонда тәрбиәләнгән. Унан һуң Өфө балалар хеҙмәт колонияһында булған. Илебеҙгә немец фашистары баҫып ингәс, үҙе теләп фронтҡа киткән. Тиҙҙән, бөтә илде таң ҡалдырып, ҡаһарманлыҡ күрһәткән. Бына ошо юлдар, ҡыҫҡа ғына биография рәүешендә бөтә мәктәп әсбаптарына, энциклопедияларға ингән.

Нимә соҡсона һуң был ҡунаҡбайҙар - аңлашылмай. Күңелдә һуҡраныу ҡуҙғалып ҡуйҙы, тик шунда ук Һиҙиәтовтың асыуҙан ҡыҙарынған йөҙө күҙ алдына килеп баҫты. Бәлки, уның ауылдаштарының, Геройҙы үҙҙәренеке итеп алып, уның дан усағында йылынғыһы килгәндер? Аҙ ишетәбеҙме ни: берәү, йәнәһе, М. Кутузовтың яҡын ҡәрҙәше булып сыҡҡан, икенсеһе Чапаевтың тоғро юлдашы булып йөрөп, һуңынан уның нисек батып үлгәнен, өсөнсөләр иһә йөҙөп сыҡҡанын үҙ күҙе менән күреп торған. Ә инде В.И.Ленинды фин вокзалында ҡаршылаусыларҙың, уның телмәрен тыңлап, шунда уҡ большевистик идеяларҙы ҡабул иткән кешеләрҙең бөтөнләй иҫәбе-хисабы юҡ. Бында ла шул хикмәттең ҡабатланыуы ихтимал.

Хәйер, былай еңел генә фекер йөрөтөүе лә бикәр. Һәр әҙәми затҡа ла бейеклеккә ынтылыу тәбиғи. Ул үҙен кәмһетелгән, түбәндә һөйрәлеп йөрөгән йән эйәһе итеп түгел, ә ҙур ваҡиғалар эсендә, оло шәхестәр тирәһендә йөрөгән зат итеп күргеһе килә. Асылда, ошо изге теләк кеше рухын алға әйҙәй ҙә инде. Бының өсөн уны нисек ғәйепләмәк кәрәк? Икенсе яҡтан, тарихыбыҙ ҙа баштан аяҡ ҡан менән һуғарылған түгелме һуң әле: гәзит биттәре әле булһа хәбәр-хәтерһеҙ юғалған яугирҙарҙың исемлектәре менән сыбарлана, ҡасандыр һылыу-һылыу килендәр булып ултырып ҡалған, хәҙер инде биттәре сырыш әбейҙәргә әүерелгән ҡатындар, юҡ-юҡ та, ире ҡайтып тәҙрәһен сиртмәҫме икән, тип көтә. Ә бер үк әсәнән тыуған һәм һуғыш ҡойононда бер-береһен юғалтҡан бала-саға һуң? Аҙмы ни улар! Һаҡ менән Суҡ ише, юғалған балалар һаман бер-береһен эҙләй, әммә осраша алғандары бик һирәк.

Ҡыҫҡаһы, А. Матросов тураһындағы рәсми ҡарашты яҡлағы килһә лә, Ҡунаҡбай ауылы халҡының дәғүәһен дә кире ҡағып булмай ине. Ләкин төрлөсә юрау менән шөғөлләнеүҙән бер ниндәй ҙә файҙа юҡ, тоторға ла был хикмәттең айышына төшөнөү кәрәк ине. А. Матросов хаҡындағы бар китаптар ҙа алға теҙеп һалынды. Уларҙың иң билдәлеләре: П.Журба повесы, И. Легостаевтың "Үлемһеҙлеккә ташланыу" һәм М. Шкадаревичтың "Александр Матросовтың үлемһеҙ батырлығы". Авторҙарҙың барыһы ла Сашаның Ивановка балалар йортонда, унан Өфөлә тәрбиәләнеүенә, бигерәк тә батырлыҡ күрһәтеү мәленә ентекләп туҡтала. Эйе, былары бәхәс тыуҙырмай. Гәзиттәр, брошюралар, А. Матросов тураһында яҙғанда, ғәҙәттә, ошо әҙиптәрҙе ҡабатлауҙан ары китә алмай. Малайҙың тормош юлы 1936 йылдан бирле билдәле. Ә уға тиклемге осор? Һәр яҙыусы уны үҙенсә аңлатырға, тултырырға тырыша. Тик килтергән мәғлүмәттәре бигерек ныҡ айырыла түгелме һуң? Эйе, ысынлап та шулай ине. Мәҫәлән, П. Журба былай тип яҙа: "Саша бик иртә етем ҡала. Атаһын, Днепропетровск металлургия заводы эшсеһен, партия ҡушыуы буйынса, крәҫтиәндәрҙе колхоздарға берләштереүҙә ярҙамлашҡаны өсөн, кулактар үлтерә. Ике йылдан һуң әсәһе лә вафат була. Саша өләсәһәндә тороп ҡала... Унан һуң өләсәһе лә донъя ҡуя".

И. Легостаевтың ҡарашы икенсе төрлөрәк: "Матвей Матросов торба прокатлау заводында эшләй... Ирен ерләп ҡайтҡас, Мария ауырып китә... Уны больницаға алып китәләр. Бер нисә көндән һуң ул вафат була". Яңғыҙ тороп ҡалған (өләсәһе юҡ) Сашаның күршеләрендә дуҫы Егорка йәшәй икән. Хәҙер инде "Егорканың әсәһе Татьяна Петровна, йәки Петровна, үҙенең дә ваҡ-ваҡ биш балаһы булһа ла, малайҙы ла үҙ өйөнә ала".

П .Журба: "Өләсәһе үлгәс, Саша Тимоша Щукин менән осраша һәм дуҫының төрлө йыһаздар, аҫыл таштары күп булған Алмас тауы тураһында һөйләүенә ышанып, тыуған ҡалаһын ташлап китә. Уларҙың ил гиҙеүе бына шулай башлана".

И.Легостаев: "Яр буйында йәшенмәк уйнап йөрөгән малайҙар ҡайҙалар ҡапыл юҡ була. Аҙаҡ ҡына беләләр: Саша кем менәндер, атайыма барам, тип, кәмәлә йөҙөп китә". Ә П. Журбала ул йәйәүләп тимер юлы станцияһына китә һәм вагон тендерында төньяҡҡа ҡарай елә.

Күп нәмәләр ялғанмай ине бында. Иғтибарҙы тағы ни өсөндөр малайҙың шаулы һәм хозур Мәскәүгә йә иһә "ризыҡлы" Ташкентҡа түгел, ә фәҡәт Уралға ашығыуы йәлеп итә. П. Журбаның былай яҙыуында берәй ғиллә юҡмы икән? Ошонда "Правда" гәзитендә баҫылып сыҡҡан бәләкәй генә мәҡәлә ҡулға килеп эләкте. Унда А. Матросовтың батырлығын беренселәрҙән булып яҙып сыҡҡан фронт хәбәрсеһе, артабан уның биографияһын ентекләп өйрәнгән Мәскәү яҙыусыһы,тарих фәндәре кандидаты М. Шкадаревич үҙенең Днепропетровск ҡалаһында булыуын, әммә ошо фамилиялы бер кешене лә осратмауын хәбәр итә. "Матросов" фамилияһы, бәлки, уйлап ҡына сығарылғандыр, тигән фекер белдерә ул. Бына һиңә кәрәкһә! Былай булғас, моғайын, И.Легостаевтың китабына инеш һүҙ яҙған генерал-полковник И.С. Медников та: "Матросовтың балалыҡ йылдары тураһында ниндәй ҙә булһа дөрөҫ мәғлүмәттәр юҡ", - тип юҡҡа ғына әйтмәйҙер.

Был ысын ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ та, тиҫтәләгән һорау ҙа тыуҙыра торған яңылыҡ ине. Һорауҙарҙың иң олоһо шул: нисек инде, ысынын белмәй тороп, беҙ тик ялғанды тылҡып килгәнбеҙ, балалар мейеһенә лә ошо алдаҡты һеңдереп йәшәгәнбеҙ? Ҡапыл выждан алдында уңайһыҙ булып китте хатта. Саша бит уйлап сығарылған бәндә түгел, уның тәғәйен генә өйө, уны тыуҙырған һәм күкрәк һөтөн имеҙгән әсәһе, тәүләп үткән урамы, һыу ингән йылғаһы ла булғандыр бит инде? П. Журба йәки И. Легостаев быны белмәгән икән, беҙҙе аҡлаймы һуң был?

**(Дауамы бар).**

**Унының менән ижад, актер һөнәре, милли сәнғәт тураһында аҙ ғына ваҡыт һөйләшкәндән һуң да йәшлек үҙе ҡыйыулыҡ, көс, матурлыҡ икәненә ҡабаттан инанаһың. Йәш кешенең былай ҙа ҡулынан бар эш тә килә, етмәһә, Күктәр тарафынан талант һәм юғары маҡсаттарға тоғролоҡ, ҙурайғас та хыялый күңелле сабый булып ҡала белеү кеүек сифаттарҙан да мул ғына өлөш сыҡҡан икән уға. Актер сәхнәлә генә түгел, тормошта ла актермы? Бөгөнгө тамашасы сәхнәлә ниндәйерәк геройҙарҙы күргеһе килә? Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының йәш, әммә инде популярлыҡ яулап өлгөргән актерҙарының береһе Артур КӘБИРОВ менән әңгәмәбеҙ ирек, мөхәббәт, күңел ябайлығы, кешеләргә һәм хыялдарға ышаныс кеүек мәңгелек төшөнсәләр тураһында.**

# ҺӘР АКТЕР...

## үҙ геройының адвокаты



### Ил ҡәҙере ситтә беленә

Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш төбәгендә - Дыуан районының Арый тигән башҡорт ауылында тыуып-үҫтем. Туғыҙынсы класҡа тиклем ауылда белем алдым, һуңынан уҡыуымды Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында дауам иттем. Беҙҙең яҡтарҙа һәр егет кеше ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнай белә, бынан тыш, мине ағайҙарым гитарала уйнарға өйрәтте. Йырлап-бейеп, концерттарҙа ҡатнашып, район смотрҙарында беренсе урындар ҙа эләктереп ҡуйғылай инем. Шулай ҙа математик йүнәлешле класта уҡығас, киләсәктә һайлаясаҡ һөнәрем дә математика йәки информатика менән бәйле булыр, тип уйлай инем. Әммә мәктәпте тамамлай торған йылда Мәскәүгә Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһына (институт) Башҡортостандан студенттар төркөмө йыйыу тураһында иғлан иттеләр. Йәшләгемә барып, дәрәжәле ҡабул итеү комиссияһы алдына барып баҫыуым ҡапыл ғына килеп сыҡҡан хәл булһа ла, актер һөнәрен һайлауым бөтөнләй уйланылмаған эш түгел ине. Бәләкәйҙән йырлағас, профессиональ йырсы булып, сәхнәлә йырлағым да килә торғайны, актер һөнәре лә ҡыҙыҡтырғандыр, шулай ҙа үҙемде һынап ҡарау теләге быларҙың барыһынан да ҙурыраҡ ине. Хәҙер инде бер нисә йыл актер һурпаһын татып ҡарағандан һуң, был һөнәрҙең ни тиклем ҙур хеҙмәт, тир түгеүҙе талап иткәнен беләм.

Мәскәүҙә белем алыуҙан тыш, ундағы үҙенсәлекле мәҙәни мөхит тә һине тәрбиәләй. Унан һуң, Башҡортостанының ни тиклем ҡәҙерле икәнен аңлайһың, туғандарыңды һағынаһың. Курсыбыҙ көслө булғанлыҡтан, унда беҙгә мөнәсәбәт тә яҡшы булды. Башҡа курстарҙың художество етәкселәре: "Ана, башҡорттарға ҡарағыҙ, улар нисек уйнай, сәхнәлә үҙҙәрен нисек тота!" - тип, беҙҙе башҡаларға өлгө итеп ҡуя ине. Быға тиклем, башҡорттар һаман тирмәләрҙә йәшәй, тип уйлаусылар булһа ла, беҙгә ҡарап республиканың ҙур ҡалалары, оло тарихлы милли театры барлығын да белделәр. Бер осорҙа уҡығас, осетиндар, алтайҙар менән аралашып, татыу йәшәнек. Үҙ-ара һәр кем туған телендә һөйләште, бер-беребеҙҙең телендәге һүҙҙәрҙе лә отоп алырға тырыша инек.

### "Февраль. Буран..."

Ун беренсе класта уҡығанда гимназияла Рәми Ғариповтың тыуыуына 70 йылды үткәргәндә миңә Рәми ролен уйнау бәхете тейгәйне. Был ваҡиғаға ун йыл үткәндән һуң, былтыр шағирҙың тыуыуына 80 йыл тулыуҙы билдәләгәндә, "Февраль. Буран..." спектаклендә тағы ла Рәми образы өҫтөндә эшләргә тура килде. Рәми Ғарипов яратҡан шағирҙарымдың береһе, уның менән ныҡ таш булараҡ та ғорурланам, шуға ла был роль миңә актер булараҡ оло бер һынау булды. Ролгә әҙерләнгәндә күп уҡыныҡ, көндәлектәрендә Мәскәүҙең хәҙер инде миңә лә таныш ерҙәре тураһында уҡыуы, уның менән төрлө замандарҙа бер үк юлдарҙан йөрөүебеҙ, хатта ҡайһы сакта бер үк киселештәр кисереүебеҙ хаҡында белеү ҡыҙыҡ булды. Етмәһә, Рәми Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында белем алған саҡта беҙҙең бер төркөм башҡорт актерҙары ГИТИС-та уҡып йөрөгән була, улар үҙ-ара аралашып йәшәй. Ғөмүмән, был роль миңә еңел бирелмәне, шулай ҙа һәр саҡ нимәлер ярҙам итеп торған кеүек тойғолар кисереп ижад иттем уның образын.

Бер осор Рәми булып йәшәп алыу тормошома ла, тормошҡа булған ҡараштарыма ла үҙгәрештәр индерҙе, башҡорт халҡы, уның яҙмышы, бөгөнгөһө тураһында нығыраҡ уйланырға мәжбүр итте. Бөгөнгө заман кешеһе теле, иле өсөн үҙенең ғүмерен шулай фиҙа ҡыла алыр инеме икән, ни өсөн уны яҡлай алырҙай кешеләр табылмаған, ни өсөн беҙ бер-беребеҙҙең ҡәҙерен белмәйбеҙ, бер -беребеҙҙе һаҡламайбыҙ - ошондай уйҙар башҡа актерҙарҙы ла, тамашасыны ла уйландырғандыр. Үҙем өсөн шағирҙың ижадын яңынан астым, ябай һәм матур тел менән яҙылған шиғырҙарының моңон тоя башланым. Был спектакль өсөн композитор Илшат Яхин "Минең йондоҙом" шиғырына яңы көй яҙҙы, ул йыр минең башҡарыуымда яңғырай. Был шиғырын Рәми ағай Малаяҙҙа йәшәгәндә ижад итә. "Беҙ Азамат менән тышта йөрөп ингәйнек, һин ошо шиғырҙы яҙғайның. Мин һиңә, һаман да йондоҙоңдо эҙләйһең, тип һүкрангайным", тип яҙа Надежда Васильевна. Йондоҙ, тимәк, өмөт, кеше һәр саҡ нимәгәлер өмөтләнеп, нимәлер эҙләп йәшәй. Актер булараҡ, минең күңелемдә лә талпыныу гел йәшәй, яңы ролдәр, яңы яҙмыштар, яңы офоҡтар көтөп йәшәйем.

### Актер - үҙ геройының адвокаты

Бөгөн герой эҙләү менән, уның ниндәй сифаттарға эйә булыуын тасуирларға тырышыу менән артыҡ мауығып китәбеҙ. Заман менән геройҙар ҙа үҙгәрә, тигән менән дә килешмәйем. Йәнәһе, бынан егерме-илле йыл элек булған геройҙар бөгөнгө заманға тап килмәй. Үҙ ваҡытында шәп образдар уйнап, сәхнәләрҙе шаулатҡан Фидан Ғафаровты элек тамашасы нисек яратҡан, әле лә шулай ярата, бының аныҡ миҫалы булып "Бәхет хаҡы" спектакле тора. Бөгөнгө заман геройы тигән төшөнсә юҡ ул, һәр беребеҙ герой була ала, быны өсөн ябай кешегә хас булмаған әллә ниндәй сифат та кәрәк түгелдер. "Мулла"лағы Әсфәндийәр ҙә, "Артур+Нэнси"лағы Артур ҙа беҙҙең заман геройы тип аталырға хаҡлы. Табыныу өсөн өлгө эҙләү мотлаҡ түгел хәҙер, идеал юҡ, бары уға ынтылыш ҡына бар, тип әйтә бит Рәми ҙә. Кеше сәхнәлә иң тәүҙә мәрхәмәтлек, ихласлыҡ, күңел ябайлығы, мөхәббәт күрергә теләй - бына нимәләр мәңгелек!

Шуға ла сәхнәләге ыңғай һәм кире роль араһында ла сик айырмаһы шартлы ғына. Унан һуң, һәр актер үҙ роленең адвокаты, уның теге йәки был осраҡта ни өсөн шундай юлға барғанлығын аҡларға тейеш. "Мулла"лағы Эльбрус Нәлимә өсөн, ауылда гел беренсе булып өйрәнгәнлеге, шуға икенсе урында ҡалғыһы килмәгәне өсөн насар юлға бара. Илшат Йомағоловтың "Нәркәс" спектаклендәге Йәноҙаҡ йән ҡәҙерле булғандан бигерәк, Нәркәстә иҫһеҙ яратҡаны өсөн һатлыҡ йәнгә әйләнә. Ҡайһы берҙә ыңғай ролде һүрәтләүе еңел булмай, мәҫәлән, "Минең ғаиләм" спектаклендәге Азат роле ауырыраҡ бирелде миңә. Башҡаларын үҙһенмәйем, тимәйем, әммә Рәми ("Февраль. Буран..."), Артур ("Артур+Нэнси") ролдәрен яратып башҡарам, хатта, кире герой тип, тамашасы яратмай ҡараһа ла, "Мулла"лағы Эльбрустан оло кинәнес алам. Репертуарҙа төрлө жанрҙағы спектаклдәр булырға тейеш, был актерҙарҙы ла үҫтерә. Әле яңыраҡ ҡына сәхнәгә сыҡҡан "РУДИ-NOVER OFF!" спектакле лә беҙгә - йәш актерҙарға үҙенсәлекле мәктәп булды.

### Сәхнә - шул уҡ тормош...

Сәхнәлә төрлө ҡыҙыҡлы хәлдәр ҙә булып тора. Әйтәйек, һин сәхнәлә үҙеңдең репликаңды әйтеп бөтөрәһең, ә ошо мәлдә сәхнәгә сыға торған актерҙың тотҡарланыуы ла ихтимал. Быңдай сакта тамашасыға һиҙҙермәй генә һөйләнгән булаһың, үҙең иплап кенә сәхнә артына ҡарайһың. Шулай, "Хәйерле иртә, Энид!" спектаклендә сәхнә артында тотҡарланған актерҙы тиҙ генә үҙемә эҙләп алып килергә тура килде, хатта тамашасы аңламай ҙа ҡалды. Быңдай көтөлмәгән ваҡиғаларҙан сыға белеү актерлыҡ оҫталығынан бигерәк, тәжрибәнән киләлер, моғайын.

Кешенең һөнәре уның тормошона тәьҫир итә, әлбиттә, тик актерҙарҙы тормошта ла актер икән тип ҡабул итергә кәрәкмәй. Кемдер беҙ театрға киләбеҙ ҙә, бөтөнләй икенсе кешегә - актерға әйләнәбеҙ икән, тип уйлайҙыр, был улай түгел. Сәхнәлә кешеләр түгел, ә актерҙар уйнай икән, был уйын тамашасы өсөн үтә күңелһеҙгә әйләнәсәк. Юғиһә, К. Станиславский: "Әгәр ҙә театрҙың төп тәғәйенләнеше күңел асыуҙа ғына булһа, уға шул тиклем күп көс түгергә лә кәрәкмәҫ ине. Театр ул тормошто сағылдырыу сәнғәте", - тип әйтмәҫ ине.

Шулай уҡ тормошта ла, туҡта, мин теге ролдә шулай тип әйтәм, бында ла шулай тип әйтәйем, актерлыҡ оҫталығымды ҡулланайым әле, тип тороп булмай. Эйе, тормошта ла бер туҡтауһыҙ уйнап йөрөүселәр була, тик ике йөҙлөлөк ипкене бәрелеп торғанлыҡтан, уларға ҡарауы ла имәнес.

### Уллы улы менән маҡтаныр

Халҡыбыҙҙа "Ир кеше йорт һалырға, ағас ултыртырға, ул үҫтерергә тейеш", тигән әйтем бар, мин дә быларҙы тормошҡа ашыра башланым. Ҡала ситендә йылап йорт төҙөйбөҙ, атай-әсәйҙәр ярҙам итеп тора, рәхмәт уларға. Йорто булғас, ағасын да ултыртырбыҙ, Алла бирһә. Улымдың исеме Тимерхан, уға дүрт йәш. Ошо көндәрҙә генә ҡыҙым донъяға килде. Кәләшем Лилиә менән 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында бер ваҡытта уҡыныҡ, ул һөнәре буйынса иҡтисадсы. Холҡомда ғәҙеллек, дуҫтарға, туған телемә, халҡыма тоғролоҡ бар, тип иҫәпләйем, улымда ла ошо сифаттарҙы тәрбиәләргә тырышам. Бәләкәй саҡтан тик башҡортса ғына һөйләштек, беҙгә мотлаҡ "атай", "әсәй" тип өндәшә. Балаға аҙаҡ ҡыйын булыр, тип, уның менән русса аралашҡан ата-әсәләрҙе бөтөнләй аңламайым. Русса өйрәтмәйем, тиһәң дә, ул барыбер өйрәнәсәк, шуға ла сабый саҡтан туған телен яратһын, уның моңон тойоп үҫһен, тинек. Әкиәттәр, шиғырҙар ярата, Рәми Ғариповтың шиғырҙарын ятлап, бәйгелә лә ҡатнашты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яратҡан эшең менән шөғөлләнеүҙән үҙең генә түгел, һине уратып алған кешеләр ҙә оло кинәнес алһа, тимәк, һөнәреңде дөрөҫ һайлағанһың, тиҙәр. Ошо күҙлектән сығып ҡараһаҡ, актер Артур Кәбиров геройҙарының сәхнәгә сығыуын тамашасы көтөп ала икән, ул һөнәр һайлағанда ваҡиғаларҙың бер аҙ ғына үҙгәреп китеүендә лә хәҙер ҙур мәғәнә бар кеүек.**

**"Ҡараңғылыҡты ҡәһәрләгәнсе, бәләкәй генә шәм тоҡандырыу енелерәк" - был Конфуций һүҙҙәре. Шуға ла, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, үҙегеҙҙең шәмегеҙҙе тоҡандырығыҙ һәм яратҡан эшегеҙ менән булығыҙ! Һөнәренә Рәми роле аша килгән йәш актерға ла, шағир кеүек үк, һәр йөрәккә изге ут яғыу бурысы ла алдан яҙылған булғандыр әле, моғайын... Уға был изге эшендә уңыштар теләйек.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

*✓ Сирҙе мөмкин тиклем иртәрәк асыҡлау ифрат мөһим әһәмиәткә эйә - был осраҡта уны тулыһынса дауалау мөмкинлеге бар. Үкенескә ҡаршы, сире аҙған стадияла беҙгә килеп йығылыусы ауырыуҙар ҙа осрай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МУЙЫН АУЫРТЫУЫ...

## күңел торошо билдәһе

■ Лос-Анджелестың Cedars-Sinai медицина үҙәге тикшеренеүселәре куркума нигеҙендә яңы препарат уйлап тапҡан. Ул инсульттан һуң тиҙерәк һауығырға мөмкинлек бирә. Ғалимдар әйтеүенсә, был дарыуҙы ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ҡулланырға ла буласаҡ. Яңы дарыуҙың төп тәьҫир итеүсе матдәһе булып куркумаға сағыу төҫ биреүсе полифенол - куркумин тора. Ул ялҡынһыныуға ҡаршы тора һәм антиоксидант тәьҫиргә эйә. Яңы дарыуҙы инсульт кисергән кешенең организмына өс сәғәт эсендә индереп өлгергәндә, баш мейеһе күҙәнәктәрен тере килеш һаҡлап алып ҡалырға мөмкин, ти ғалимдар. Был тәмләткесте аш-һыу әҙерләгәндә лә йышыраҡ ҡулланыу зарарлы булмаясаҡ.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон билгеләп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә тән температураһы күтәрелә.

■ Британия ғалимдары йоҡоноң ниндәйҙер ҡарарҙар ҡабул итеүҙә мөһим роль уйнауын дәлилләгән. Йоҡлаған ваҡытта кеше аңға ябыҡ булған мәғлүмәт ала икән. Тикшеренеүҙәрҙә 27 ир-егет һәм 34 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Улар бер-бер артлы ябай һәм ҡатмарлы мәсьәләләр сисергә тейеш була. Ҡатнашыусылар мәсьәләләр сисеү арауығында ятып йоҡлап алыу мөмкинлегенә эйә була һәм ғалимдар асыҡлауынса, йоҡлап алыусылар башҡаларға ҡарағанда ҡатмарлы мәсьәләләрҙе күберәк сисеүгә өлгәшә.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, әгәр ҙә муйын ауырта икән, был физик түгел, ә психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда игтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының - депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Коннектикут университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһеҙлек барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Быңдай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Егерме беренсе быуатта йәшәйбеҙ. Кеше аяғы әллә ҡасан уҡ инде Айға баҫһа, кешелек әле башҡа йондоҙ һәм планеталарҙан да үҙенә киләсәктә торор урын күҙләй. Шул уҡ ваҡытта Ер проблемалары һаман ерҙә ҡала, кешелекте борсой, уйға һала. Шундай хәүефтәрҙең береһе - яман шеш ауырыуҙары - йыл һайын, көн һайын, сәғәт һайын меңәрләгән кешенең ғүмерен ҡыя. Үкенес, ракҡа ҡаршы дарыу уйлап сығара алмай һаман ғалимдарыбыҙ. Дарыу булмаһа, һис юғында нисек һаҡланырға бындай сирҙән? Хәүефле диагнозға дусар булғандарға ни ҡылырға? Уларҙы ҡотҡарыу, дауалау буйынса ниндәй шарттар булдырылған республикала? Фән һәм техниканың һуңғы ҡаҙаныштарына нигеҙләнгән ниндәй төр диагностика һәм дауалау саралары файҙаланыла? Республика онкология диспансерының баш табибы, медицина фәндәре кандидаты, Өфө ҡала округы Советы депутаты Руслан Закир улы СОЛТАНОВ ошо һорауҙарға яуап бирә.**

# ТӘНЕ ҺАУҘЫҢ... ЙӘНЕ ҺАУ



**➔ Бөгөнгө көнгә ҡарата республикала һәм Өфөлә яман шеш ауырыуҙары буйынса ниндәй күренеш күҙәтелә, был йәһәттән хәлдәргә ниндәйерәк баһа бирер инегеҙ?**

- Һүҙҙе һандарҙан башларға тура килә, сөнки ысын хәл-торошто факттарҙан да асығыраҡ һөйләүе ҡыйын. 2012 йылда беҙҙең республикала яман шеш менән ауырыусылар һаны 100 мең кешегә -287,5, ә Өфөлә 326,2 кеше тәшкил итһә, сағыштырыу өсөн бынан алдағы ике йыл күрһәткестәрен алғанда, ул 2010 йылда - 279,5 һәм 337,7, 2011 йылда шуға ярашлы 278,5 һәм 312,9 булған. Башҡортостан буйынса иҫәптә торған яман шеш менән сирлеләр һаны ике йыл элек 69 245, ә 2011 йылда 71 489 булһа, былтыр был күрһәткес 74 меңдән артып киткән. Был, яман шеш менән сирлеләр һаны арта, тиеүҙән бигерәк, диагностика ысулдарының яҡшырыуы һәм ауырыуҙы иртә стадияла асыҡлау менән бәйле. Сирҙе мөмкин тиклем иртәрәк асыҡлау ифрат мөһим әһәмиәткә эйә - был осраҡта уны тулыһынса дауалау мөмкинлеге бар. Үкенескә ҡаршы, бер тапҡыр ҙа онкологҡа барып күренмәгән һәм сире аҙған стадияла беҙгә килеп йығылыусы ауырыуҙар ҙа осрай. Һәр кем үҙ һаулығы өсөн яуаплылыҡ тойорға тейеш. Исмаһам, үҙ-үҙеңде тикшереп тороу (был бигерәк тә һөт биҙҙәре шеше табылған ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағыла) әллә ни ҡатмарлы диагностика талап итмәй бит. Тәнеңдә, берәй ағзаһында барлыҡҡа килгән сәйер үҙгәреште асыҡлағас та врачҡа барып күренеүҙе һуҙырға ярамай. Юғиһә ауырыуҙарҙың 23 (Өфөлә - 20) проценты сире аҙғас ҡына беҙгә мөрәжәғәт итә, һөҙөмтәлә сире асыҡланғандарҙың 28 (Өфөлә- 25) проценты йыл һуҙымында яҡты донья менән хушлаша.

**➔ Ниндәй төр яман шеш күберәк таралған, уның сәбәптәре низә тип уйлайһығыҙ? Республика районадры буйынса хәлдәр нисек?**

- 2012 йылда, быға тиклем булмағанса, һөт биҙҙәре яман шеше икенсенән беренсе урынға күсте, ә гел беренсе урында торған үпкә рагы - икенсе, тире яман шеш ауырыуҙары өсөнсө урында килә. "Лидерлыҡ"тың сәбәбе, бая әйтеп киткәнемсә, республика ҡатын-ҡыҙҙары араһында туктаүһыҙ аңлатыу, иҫкәртеү саралары алып барыу һәм һөҙөмтәлә сирҙең иртәрәк һәм күберәк кешелә асыҡланыуында, минеңсә. Ә ғөмүмән алғанда, яман шеш сирҙәренең сәбәптәре төрлө һәм күп. Үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм экология торошон алһаң да, аҙыҡ-түлек сифатына күҙ һалһаң да аңлашылып тора. Бынан тыш, тартыу, эсеү кеүек яман ғәҙәттәр хаҡында ла күпме һөйләргә була! Аҙ хәрәкәтләнеү, дөрөҫ туҡланмау, даими стресс шарттарында йәшәү... Ҡыҫҡаһы, нәҫелдән килгән сир сәбәптәренән башҡаһының күбеһе беҙҙең үҙебеҙгә бәйле. Әйткәндәй, тире рагы өсөнсө урында тора, тиғәнгә күптәр ғәжәпләнеү белдерә. Ә уйлап ҡараһаң, йәй етер-етмәҫтән бик күптәр диңгеҙ буйҙарында (хатта сит илдәргә сығып) йә булмаһа йыл әйләнәһенә соларийҙарҙа ҡыҙыныуҙы модаға әйләндереп алды. Тап гиперинсоляция (ҡояш йә ультрафиолет нур тәьҫирендә оҙаҡ булыу) тире ауырыуҙарына килтереүсе төп сәбәп тә инде. Яман шеш сирҙәре буйынса хәүеф төркөмөндә нигеҙҙә химия етештереүе өлкәһендә эшләүселәр тора. Күмертау, Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларында яман сиргә юлығыусылар буйынса күрһәткестәр бик юғары, ә бына Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил районадрында - иң аҙе. Краснокама, Янаул, Ҡариҙел, Борай, Белорет райондары буйынса яман шеш сирҙәренән үлеү осраҡтары күп. Был урындарҙағы медицина хеҙмәтенең кимәлен күрһәтеп тора ла инде. Әйтелгәндәрҙән тыш, ашҡаҙан һәм тура эсәк яман шеш сирҙәре лә киң таралған.

**➔ Республикала онкология хеҙмәте күрһәтеү нисек ойошторолған? Онкодиспансерҙа сирлеләрҙе дауалау шарттары заман талабына яуап бирәме? Яңы төр аппаратура һәм ҡорамалдар менән йыһазландырыуҙа ҡытлыҡ һиҙелмәйме?**

- Үкенескә күрә, кешеләрҙә һаман булһа онкологтан ҡурҡыу тойғоһо йәшәп килә. Шул сәбәпле, улар үҙ организмында барлыҡҡа килгән хәүефле үҙгәрештәргә игтибар итмәҫкә тырыша. Шуға күрә, махсуслаштырылған медицина ярҙамы алыуҙы еңеләйтеү маҡсатында Башҡортостан райондары һәм ҡалаларында беренсел кабинеттар булдырылды, унда квалификациялы онкологтар эшләй. Әгәр урындағы белгес ысынлап та ниндәйҙер үҙгәрештәр күрә һәм ентекле диагностика кәрәк тип тапһа, ауырыу Муниципаль-ара онкоүҙәккә ебәрелә. Республикабыҙҙа ошондай 15 үҙәк (шуларҙың 5-әүһе - Өфөлә) асылды, улар тейешле аппаратура һәм ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Бында тикшерелеү үткәндән һуң ғына пациент Республика онкодиспансерына килеп эләгә. Эштең ошондай рәүештә ойоштороулоы ҡайһы ваҡыт нигеҙһеҙ рәүештә тура диспансерға ебәрелеүсе пациенттар ағымынан арынырға булышлыҡ итте. Ауыр сирлеләргә паллиатив ярҙам төрөнә ҡағылышлы шуны әйтмәксемен: әлеге ваҡытҡа Башҡортостанда 974 паллиатив койка-урын булдырылған, шулай ҙа был хоспис асыу мәсьәләһен көн тәртибенән төшөрмәй. Медицина нормативтары буйынса төбәктәрҙә һәр бер миллион халыҡ өсөн тәүлек әйләнәһенә иҫәпләнгән 80 койка-урын булырға тейеш. Республика клиник онкология диспансерының паллиатив ярҙам бүлексәһендә әле ремонт тамамлана, ошо көндәрҙә 22 урынлыҡ бүлексә тулы көсөнә эшләй башлаясаҡ. Кәрәк осраҡтарҙа өйөндә дауаланыусы ауыр сирлеләргә махсуслаштырылған паллиатив ярҙам бригадаһы хеҙмәт күрһәтә.

Заманса диагностика сараларына килгәндә, яҡшы хәбәр еткермәксемен. Гәзит уҡыусылар, бәлки, хәтерләйҙер: былтыр "Башҡортостан Республикаһында радиохирургия менән берлектә позитрон-эмиссия томографияһы (ПЭТ- үҙәк) булдырыу" мәсьәләһе буйынса Хөкүмәт кәңәшмәһе булып үткәйне. Быйыл Өфөлә онкодиспансер биләмәһендә "РОСНАНО" акционерҙар ойошмаһы менән берлектә 4000 кв. метр майҙанлы заманса ПЭТ- үҙәк төҙөлә башлаясаҡ. Бөгөнгө көнгә ПЭТ - онкология сирҙәрен иртә диагностикалауҙа ысын мәғәнәһендә "алтын" стандарт иҫәпләнә. ПЭТ компьютер томография (КТ) менән берлектә бер тапҡыр төшөрөүҙән дә кеше ағзалары һәм системаһын ентекле өйрәнергә, яман шештең яңы башланырға торған миллиметрлыҡ ҡына структураларын да асыҡ танырға мөмкинлек бирәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# АШ ӨСӨН ТҮГЕЛ...

## им-дарыу өсөн

Мәғлүм булыуынса, яман шеш менән сирләүселәрҙә аҡһым, углевод һәм липид матдәләр алмашыныуы боҙола. Сир иммунитетты ҡаҡшата. Насар туҡланыу организмды артабан хәлһеҙләндерә. Организмдың ҡаҡшауы ракты дауалауҙа ыңғай һөҙөмтә бирмәй, сөнки 45-50 процентҡа тән массаһы ҡытлығы үлемесле иҫәпләнә. Үкенескә ҡаршы, бөгөн рак менән сирлеләр өсөн универсаль диета эшләнмәгән әле. Рәсәй һәм сит ил белгестәре тикшеренеүҙәренә таянып, үпкә, бөйөр һәм һейҙек ҡыуығы яман шеше менән сирлеләр өсөн ошондай туҡланыу тәртибе тәҡдим ителә. Ғалимдар фекеренсә, аҙыҡта аҡһымдың етешмәүе лә, артыҡ булыуы ла берҙәй зыянлы. Аҙ аҡһымлы диета бауыр һәм һөт биҙҙәре яман шешен тиҙләтеп ебәреүе ихтимал, ә аҡһым артыҡ күп булған аҙыҡтан һейҙек ҡыуығы, бауыр рагы тотҡарланһа ла, тура эсәк шеше шәберәк үҫешәсәк, тип иҫәпләнә. Ит, майлы һәм тоҙло аҙыҡтар организмда әселекте көсәйтә һәм был һейҙек ҡыуығының ялҡынһыныуына килтерә. Билдәле булыуынса, ҡыҙыл ит, ғөмүмән, яман шеш сирен тиҙләтә, шуға күрә унан баш тартырға тура киләсәк. Колбаса, ветчина, бауыр ҙа ярамай, йомортҡа менән сыр ҙа кәнәш ителмәй. Иң яҡшыһы - аҡ ит (тиреһе һыҙырып алынған тауыҡ түшкәһе, майһыҙ кролик ите), диңгеҙ балығы (горбуша, сардина, тунец, скумбрия, сельдь, треска, минтай), майһыҙ эремсек, ҡуҙаҡлылар (соя, фасоль, борсаҡ,чечевица), бәшмәктәр, сәтләүектәр. Майҙар үҙләштереүгә килгәндә, мал майынан (һимеҙ ит, аҡ май, ҡаймаҡ) бөтөнләй баш тартырға кәрәк, улар яман шеш тәрҙәрен тиҙләтә. Балыҡ майына өҫтөнлөк биреге (көнөнә 3 тапҡыр 1-әр сәй ҡалағы йәки 1-2 капсуланы - көнөнә ике тапҡыр), үҫемлек майҙары файҙалы. Зәйтүн майы үпкә рагының ҡайһы бер төрҙәрен иҫкәртә. Миндаль, грек сәтләүеге, көнбағыш, шыттырылған бойҙай, кишер, зәйтүн емеше, папайя А һәм Е витаминдарына бай. Балыҡ майындағы омега-3 майлы кислоталар һәм D витамины ғөмүмән, яман шешкә ҡаршы бик көслө саралар, улар иммунитетты күтәрә, шешенеү һәм ялҡынһыныуҙы кәметә. Бета-каротинға бай кишер, ананас, әфлисун, кедр сәтләүеге һәм манго үпкә рагы үҫешен тотҡарлай. Помидор, башҡа ҡыҙыл төҫтәге йәшелсә-емештәр, көслө антиоксиданттар булараҡ, ҡыҙыл үңәс, ауыҙ ҡыуышлығы һәм йотҡолоҡ, ашҡаҙан, йыуан һәм тура эсәк яман шешен әкренәйтеү һәләтенә эйә. Алма (ҡабыҡлай көйө) - йыуан эсәк, бауыр өсөн, көн дә банан ашау - бөйөрҙәр өсөн, ә гранат һуты үпкә, тире һәм простата биҙҙәре шешенән файҙалы, ти белгестәр.

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

### Ҡытай акупунктураһы серҙәре

Ауыр аҙыҡтан баш тартҡандан һуң тормош тотош асыштарға һәм нурға тулды. Әлбиттә, мәғлүмәттең бер өлөшөн мин баҫма матбуғаттан алдым. Тап ошо ваҡытта уҡыу тематикаһы икенсе яҡҡа ауышты, ниһайәт, нимәне уҡырға, ә нимәне уҡымаҫҡа икәнен аңланым. Тормош юлымда бер нисә айҙар буйына яуап таба алмаған һорауҙарыма бер һүҙ менән яуап биреүсе кешеләр осрай башланы. Әммә был хаҡта мин саҡ ҡына һуңыраҡ һөйләрмен.

Үҙгәртеп ҡороуҙар башына тап килгән йылдарҙа көнсығыш әҙәбиәтенә ҡарата тыуған ҡыҙыҡһыныуым да аңлашылды. Бер ваҡыт рефлекс терапияһы буйынса әсбап ҡарап ултырҙым. Унда кешеләрҙең тәненең контуры, ҡулдар һәм аяҡтар буйына бик күп нөктәләр төшөрөлгәйне. Текстан асыҡлауымса, нөктәләр меридиан тип күҙ алдына килтергән линиялар буйынса урынлашҡайнылар. Уларҙың урынлашыуында бер ниндәй тәртип күрмәнем һәм үҙ-үҙемә шундай һорау бирҙем: иң тәүге ҡытай дауалаусыһы был нөктәләрҙең ҡайҙа урынлашыуын нисек тапҡан? Билдәле табип Ф. Кандаровтан ошо уҡ темаға бағышланған китап һатып алдым, әммә унда үҙемде ҡыҙыҡһындырған һорауға яуап табылманы.

Яуап көтмәгәндә, эстән, булмышымдан килде. Бер ваҡыт таң менән лекцияларға әҙерләнеп ултырғанда һул ҡулымдың беләҙеге менән терһәк араһы ныҡ итеп ҡыҫыта башланы. Текстан айырылмай ғына ҡысытҡан урынға ручкамдың осо менән еңелсә генә баҫып, бер нисә тапҡыр бороп алдым. Сирек сәғәттән һуң ҡулым тағы ҡысыта башланы. Был ваҡытта мин ултырғыстың артына һөйәлеп ял итә инем. Күҙҙәрем йомоҡ, башымда бер уй юҡ. Ҡыҫҡаһы, ойоу торошондамын. Ойоу - тынысланыуҙың шундай мәле, тән, йән, рух берләшә, кеше Йыһанда ирееп юғала.

Аңым бары тик ҡысытыу булған урынды ғына теркәне. Ул ғәҙәттәгесә тире өҫтөндә түгел, ә уның эсендә ине. Мин был урынды боҙ өҫтөнән бер миллиметр самаһы тәрәнлектә туңып ҡалған ҡом бөртөгөнә оҡшаттым. Был нөктә ғәҙәттәгесә бәләкәй күләмдә түгел, ә ярты сантиметр диаметрҙағы әйләнәне үҙ эсенә алғайны. Шул уҡ ваҡытта ҡысытыуҙың көсөргәнеше үҙәктән ситкә табан кәмей барҙы. Әммә аптыратҡаны был түгел, ә ошо физиологик күренешкә шундай эпитет ҡулланыу мөмкин булһа, ҡысытыуҙың сифаты аптыратты. Нөктә ябай ғына ҡысытманы, тупаҫ түгел ине, ә нисектер йомшаҡ, наҙлы, ләззәтле. Ғөмүмән, ер сығышлы түгел ине.

Ручка алдым һәм уның осло яғы менән еңелсә генә ҡысытыу урынына баҫтым. Әйтеп аңлатҡыһыҙ татлы ауыртыуҙан ҡапыл ҡулым ҡалтыраны, ә ауыртыуы ҡайҙалыр төпкә китте. Миңә хатта ул күҙгә күренмәҫ сым буйлап ҡайҙалыр алыҫҡа, сикһеҙ йыһанға киткән кеүек тойолдо. Ручка менән тағы ла нығыраҡ итеп баҫтым һәм тағы ла татлы һулҡылдаған ауыртыу кисерҙем. Әммә үҙенең көсөргәнеше буйынса ул тәүгеһенән ҡайтышыраҡ ине. Тамам үҙ халәтемә ҡайтып, ҡулыма ҡараным. Унда бер-береһенән ике сантиметр алыҫлыҡта урынлашҡан ике нөктә күрҙем. Уларҙың менән тәнем өсөн акупунктура нөктәләре булып тороуын икенсе көн иртән, бер рәткә теҙелгән дүрт нөктәне күргәс кенә аңланым.

Айыҡ һәм һеҙгә билдәле сикләүҙәр менән үрелеп барған йәшәү рәүеше тормошома айырым балҡыш бирҙе. Ул яйлап ҡына минең аша үтеп, тәнемдә, йәнемдә һәм рухымды тамырынан үҙгәртте. Йәнемдең һәм рухымдың үҙгәреүенең үҙенсәлектәре тураһында мин һуңыраҡ бәйән итермен, әммә хәҙер шуны билдәләп киткем килә: тән тиресәһенең ныҡышмал көйләнеүенән тыш, йән һәм рух өҫтөндә эшләү тураһында һүҙ алып барыу мөмкин түгел. Бына ни өсөн мин ентекле, ҡайһы бер ваҡытта бәйләнсек рәүештә, тәнем дусар булған үҙгәрештәр тураһында бәйән итәм. Ауырыу тән - йән өсөн бығау. Тән сәләмәт булмағанда ул да сәләмәт була алмай. Ә рух бик нескә: уның менән "һөйләшеү" тән дә, йән дә тулыһынса шым торғанда ғына мөмкин. Әгәр тән сәләмәт түгел икән, һеҙ бары тик уның йәндең иңрәүен хуплап торған туктауһыҙ зарланыуын ғына ишетергә һәләтлеһегеҙ.

Сибай ҡалаһында минең иң яҡын туғаным - әсәйемдең һеңлеһенең ире йәшәй. Ғаилә ағзалары уны бик ярата һәм Ирмөхәмәт ағай тип йөрөтә. Һөнәре буйынса ул - табиб. Көнсығыш рефлекс терапияһының бик күп аспекттарын белә. Ирмөхәмәт ағай миңә бер нисә энә ҡаҙау сеансын үткәрҙе. Нисектер, ул кешенең эске шыйыҡлыҡты сығарып торорға тейешле нөктәләре бар, тип әйтеп ысҡындырҙы. Шул уҡ ваҡытта ул нөктәләрҙең даими рәүештә дымлы булырға тейешлеген белдерҙе. Бының өсөн аяҡтың уң яғынан тубыктан саҡ ҡына аҫтараҡ урынын ышҡып, тирене һыҙырырға кәрәк. Мин ул ваҡытта аңлауымса, был нөктәләрҙе даими рәүештә яланғас тоторға кәрәк. Был яһалма йәрәхәттән сығыусы шыйыҡлыҡ - организмға зыянлы ҡалдыҡтар. Ирмөхәмәт ағай миңә ошо нөктәне күрһәтеп бирҙе һәм мин уны дымлы тоттом. Был ун тинлек тәңкә ҙурлығындағы урын ине. Бер нисә көн шул йәрәхәт менән йөрөнөм дә, һуңынан уның тураһында оноттом. Әммә бер нисә йылдан һуң уң аяғым ҡысыта башланы. Был дәрес ваҡытында башланды. Мин уҡытыусы өҫтәле артына барып ултырҙым да, салбар аша ошо урынды тырнай башланым. Ҡысытыу һулҡылдап, тәрәндән ине, ә тырнау әйтеп биргеһеҙ ләззәт килтерҙе. Шулай аҙна самаһы дауам итте. Һуңынан мин тәнемдә Ирмөхәмәт ағай әйткән нөктәне табыуымды аңланым. Әммә ул ағай күрһәткән урында түгел, саҡ ҡына алдараҡ һәм аҫтараҡ ине. Шунда шундай һығымтаға килдем: һәр кем боронғо аҡыл эйәләре әйткән нөктәләрҙе үҙ тәнендә үҙе эҙләргә тейеш.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

